✓*Почтальондар иғтибарына! Гәзит-журналдарҙың таралыуы һеҙҙең егәрлелек, ныҡышмалыҡ, һеҙҙең йүгереп йөрөүҙәр аша атҡарылғанын беләбеҙ һәм баһалайбыҙ. Хеҙмәтегеҙҙе һүҙ менән генә түгел, бүләктәребеҙ менән дә билдәләмәксебеҙ. Иң күп "Киске Өфө"гә яҙҙырыусы почта хеҙмәткәрҙәрен ҡиммәтле бүләктәр көтә.*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

17 - 23 ДЕКАБРЬ (АҠЪЮЛАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№51 (469)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Һабантуй кимәленән...**

олимпия кимәленә



5

**Балалағы күңел бушлығы...**

туған теленән мәхрүм итеүҙән ул



6

**Интернеттан һаҡлана алмаҫбыҙ,**



әммә уны үҙ файҙабыҙға ҡуллана алабыҙ...

8-9

**Артур+Нэнси,**

йәғни Яңы спектакль, яңы ҡараш, яңы һулыш



11

14 ТВ-программа


*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

## ТАНҺЫҒЫМ ҠАНҒАНСЫ УҠЫЙЫМ

**"Киске Өфө" гәзите менән күптән, ул сыға башлағандан алып дуҫмын, көтөп алам, танһығым ҡанғансы уҡып киләм.**

Гәзит үҙе бүләк, ә шулай ҙа уға яҙылып, квитанцияны редакцияға ебәреп тә бүләк алғыланым. Әле бына бүләккә башҡортса "Көрьән-Кәрим" китабын алып ҡыуандым. Әсәйемдең: "Бүләк алһаң, аслан иғтибарһыҙ ҡалма,"- тигән васыятын иҫкә төшөрөп, мин дә бәләкәй генә бүләк эшләргә булдым. Быйыл Ҡорбан байрамы көндәрендә Яңы Усман ауылында асылған "Хәлфетдин" һәм тыуған ауылым Ғәҙелгәрәйҙәге (Шүлгән) "Билал" мәсеттәренә "Киске Өфө"гә яҙҙырып бүләк иттем. Гәзитебеҙҙең 46-сы һанында баҫылған Баймаҡ районы уҡытыусыһы Әлфиә Йомағужина һүҙҙәрен хуплайым, "Киске Өфө" һәр бер дин әһеленең өҫтәлендә, һәр бер мәсеттә булырға тейеш, тип һанайым. Беҙҙән берҙән-бер яратып уҡыған "Киске Өфө" гәзитен башланып торған һижри 1433 йыл менән ҡотлап, алдағы ижади эштәрегеҙҙә уңыштар теләйем. Гәзитебеҙҙе тағы ла уҡымлыраҡ итеп баҫтырып ҡыуандырырға насип ҡылһын Аллаһы Тәғәлә!

**Сәләх ӘХМӘТОВ.**
**Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылы.**

## МИЛЛӘТ ШАТЛЫҒЫ

**Мин республикабыҙҙа сыҡҡан гәзит-журналдарҙың күбеһен алдырып, уҡый барам. Ә "Киске Өфө"нө сыға башлағандан бирле алдырабыҙ, уҡыйбыҙ, уйланабыҙ, фекерҙәштәр табабыҙ, бәхәскә керәбеҙ. Гәзиттең һәр һанын көтөп алабыҙ.**

Нимәһе менән "Киске Өфө" беҙҙе арбаны, үҙенә йәлеп итте һуң? Минеңсә, редакция хеҙмәткәрҙәренең берҙәм ижади эшләүендә, мәҡәләләрҙең милли рухта яҙылыуында, һәр журналистың халҡыбыҙға әйтер фекере барлығындалыр эш. Гәзит биттәрендә сағылыш тапҡан уйҙар тәрлә яҡлап сағыштырыла, уҡыусыға үҙенә ярашлыһын күңеленә ҡабул итеү мөмкинлеге асыла. Мәҡәләләр халҡыбыҙҙың рухи аңын үҫтерерүгә булышлыҡ итә, уй-кисерештәрен байыта, хис-тойғоларын арттыра. "Киске Өфө" йәштәр, мәктәп йәшендәге балалар өсөн дә бик фәһемле. Ул милләтебеҙ шатлығы, бәхете, ҡыуанысы, киләсәге.

**Рауил БОЛҒАИРОВ.**
**Күгәрсен районы Хоҙайбирҙе ауылы.**

## ШӘП ГӘЗИТКӘ ЯҘЫЛА ҺАЛЫҒЫҘ!

**Күптәрҙең "Киске Өфө" гәзите тураһында яҙған фекерҙәрен, баһаларын уҡып барам һәм ихлас хуплайым.**

"Киске Өфө" - тормош һабаҡтары биреүсе, тормоштоң тәрлә күренештәренә айыҡ аҡыл, асыҡ күҙ менән ҡарарға өйрәтеүсе, киләсәккә өмөттә һүндермәскә, алға барырға юл күрһәтеүсе, рухи байлыҡ биреүсе, башҡортлоғонд онотмаҫҡа әйҙәүсе оло уҡытыусы ул.

"Киске Өфө"нө уҡыған һайын үҙенә ниндәйҙер асыш яһайһың: сит яҡтарҙа йәшәүсе милләттәштәр, арҙаҡлы шәхестәребеҙ тураһында беләбеҙ, күпме ҡанатлы һүҙҙәр уҡыйбыҙ, кешелектең һулышы, йәшәйеше менән танышабыҙ. "Киске Өфө"нө уҡымағандың күңеле кителгән һауыҡа тин, минеңсә. Был гәзитте уҡыған һайын яңыраһың, күңелдә ҡатҡан ҡара юшҡындар ҙа бөтә бара.

"Киске Өфө"лә бөтә ғүмер-булмышын башҡорт матбуғатына, халҡына арнаған кешеләр эшләй. Рәхмәт уларға! Ҡыҫҡаһы:

"Киске Өфө" - шәп гәзит,
Әйтерһең, батыр егет.
Бөтә булған һорауҙарға
Шунда уҡ бирә әтвит.

"Киске Өфө"нө уҡый-уҡый,
Күҙҙәрең талһа талһын.
"Киске Өфө"гә яҙылығыҙ,
Үкенескә ҡалмаһын!

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы.**

## ТЫУҒАН ЯҠ МЕНӘН БӘЙЛӘЙ

**Бына икенсе йыл инде Башҡортостандан ситтә, Санкт-Петербург ҡалаһында йәшәйем. Сәйәхәт итеү маҡсатында килеп, йәшәргә тороп ҡалыуымдың сәбәптәре күп. Ләкин тыуған яҡ менән бәйләнеште өҙөргә һәм бөтөнләйгә Рәсәйҙең төньяҡ баш ҡалаһында төпләнеп ҡалырға ниәт юҡ, ә бер-нисә йылдан кире Башҡортостанға ҡайтып, республикама кәрәкле һәм файҙалы эштәр башҡараса҄кмын, тип ышанам. Республикам менән бәйләнеште юғалтмауҙа "Киске Өфө" гәзитенең роле баһалап бөткөһөҙ.**

Өфөнөң һәм республиканың тарихын тулы кимәлдә асып, һығымталар эшләүсе, бөгөнгөһөн яҡтыртыусы һәм киләсәккә оптимистик фараздар менән бай гәзиттең сайтҡа ҡуйылғанын һәр ваҡыт көтөп алам. Һәр яңы номерын күргән һайын үҙемде тыуған яғымда йөрөгәндәй хис итәм. Милләттәштәремдең асыҡ һәм алсаҡ, бәхетле йөҙҙәрен күреп, йөрәгемдә ҡыуаныу хисе арта, тәбиғәт байлығының гүзәллеген һәм матурлығын еткереүсе фотоһүрәттәргә ҡарап, үҙемде шул тауҙар итәгендә йөрөүсе, зәңгәр күлдә ҡолас ташлап йөҙөүсе, икеҙ-сикһеҙ баҫыу-ҡырҙар буйлап гиҙеүсе кеше итеп күрәм. Гәзиттең һәр битенән тыуған яҡ тыны килгәндәй тойола.

Гәзиттең төүге битендә даими рәүештә донъя күреп килгән "Әйт, тиһәгеҙ..." рубрикаһы актуаль, нәҡ бөгөнгө көндөң үткер мәсьәләләрен яҡтыртыуы, фәһемле һәм төплө фекерле яуаптары менән һәр саҡ уҡымлы. Рубрикала бирелгән һәр һөйләм үҙенә ҙур мәғәнә һәм йөкмәткө һыйҙыра. Ғөмүмән, гәзиттә баҫылған һәр материалға ҡарата ошо фекерҙе ҡулланырға була, сөнки уларҙың береһе лә ҡабартылған буш һүҙ менән сыбарланмай. Ҡыҫҡа, тапҡыр һәм мөһим моменттарҙы күҙ уңышынан ысҡындырмай яҙылған мәҡәләләр бер тында уҡылһа ла, һәр береһе уйға һала һәм фекер йөрөтөргә мәжбүр итә. Шуға күрә уларҙы ҡат-ҡат уҡып сығам һәм гәзиттең киләһе һанын көтә башлайым.

"Киске Өфө"нөң һәр һанын шундай йөкмәткеле, тәьҫирле, мәғәнәле итеп сығарыуға өлгәшкән редакция коллективына уңыштар, иҫәнлек-һаулыҡ һәм гәзит уҡыусыларының рәхмәтен ишетеп, тағы ла оҙаҡ йылдар ижад итеүҙәрен теләйем. Яңы йыл тик шатлыҡ-ҡыуаныстары менән килһен.

**Айгөл УСМАНОВА.**
**Санкт-Петербург ҡалаһы.**



Рәсәйҙең иң көслө кешеһе Эльбрус Ниғмәтуллин булыр был.

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# КӘЗӘ МАЛМЫ НИ, ТИМӘ - ҡымыҙына бер ни етмәй!



**Ниндәй заманда ла ауыл халҡы малтыуарына, баҡсаһына таянып көн күрә. Ер туйындыра ла, кейендерә лә икәнлеген улар яҡшы аңлай. Шулай уҡ ауыл халҡының кәртә-ҡураһындағы мал да ғаилә бюджетына арыу ғына килем килтереүсе сығанаҡ булып тора. Ит, йөн, һөт - былар барыһы ла "эшкә егелә". Шулар рәтендә кәзә һөтөнән эшләнгән ҡымыҙ ҙа бар. Рубриканың бөгөнгө ҡунағы шундай уңған хужабикәләребеҙҙең береһе Шәүрә СӘЛИМОВА.**

-Хыялымда хаҡлы ялға сыҡҡас, кәзә көтөп, уның ҡымыҙын эсермен, тигән уй йөшәне. Ошо ниәтемде, хаҡлы ялға сыҡкан тәүге йылда уҡ тормошҡа ашырҙым һәм ғаиләмде был эсемлек менән һыйлай башланым, ҡунаҡҡа ла тотоп барҙым, күрше-тирәгә лә индерҙем. Тора-бара, өйгә һорап килеүселәр йышайғас, мин эшмәкәрлегемде киңәйтеп, кәзәләремде арттырып, һатыуға сығарыу өсөн дә ҡымыҙ эшләй башланым. Кәзә һөтөнән эшләнгән ҡымыҙҙың бик тәмле генә түгел, файҙалы һәм витаминға бай эсемлек икәнен күбеһе яҡшы белә.

Бөгөн ололар ғына түгел, ә йәш быуында ла сәләмәт тормош алыу барыу, һау булыу культы алға сыкты. Был бик ҡыуаныслы хәл һәм нәҡ ошондай юлда булыусылар үҙ һаулығын нығытыуҙа кәзә ҡымыҙының да роле ҙур ғына булыуын аңлай һәм был эсемлекте даими рәүештә эсеүҙе хуп күрә. Шулай итеп, файҙалы эсемлекте ғаиләм генә түгел, район үҙәге халҡы ла эсеп кинәнә. Баҙарҙа йәйгеһен 1,5 литрын 100-120 һумға ҡуям һәм оҙаҡ та ултырмай һатып бөтәм. Бер сығыуымда 5-8 һауыт ҡымыҙ һатып, пенсияға ҡуш булырлыҡ аҡса эшләйем, балаларға, ейән-ейәнсәрҙәргә лә ярҙам итәм. Шулай уҡ йыш ҡына заказ буйынса ла эшләйем, ул саҡта ҡымыҙҙы өйҙән үк килеп алалар, баҙарға сығып тораһы ла кәрәкмәй.

Был шөғөләмдең тағы ла бер өҫтөнлөклө яғын әйтеп китергә кәрәк: тауарымды һатыу өсөн яҡын-тирәлә ҡала эҙләп, ауыр сумкалар йөкмәп юлдарҙа йөрөмәйем, сөнки бер сумкаға күпме генә тейәйһең дә, ауыр әйберҙе күтәреп ҡайҙа ғына барып етәһең инде. Ә тауарымдың урында ла үтемле булыуы мине был михнәттәрҙән ҡотҡара, шулай уҡ ҙур ғына булған юл сығымынан да арындыра.

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА яҙып алды.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# АУЫЛ БАЛАЛАРЫ ИНДЕ БЕҘ...

**Ауыл балалары инде беҙ, ауыл балалары булып ҡалабыҙ. Телебеҙҙә -ауыл, уйыбыҙҙа -ауыл, хәтирәләр - гел ауыл тирәһендә. Матурҙарын һоҡланып телгә алабыҙ, киреләренә әсенәбеҙ. Ә барыбер ҙә артыҡ идеаллаштырабыҙ беҙ ауылды. Хатта уның осоҡ ҡына етешһеҙлеген дә ауыр ҡабул итәбеҙ.**

Бына, мәҫәлән, әле генә бер танышым беҙҙең барыбыҙ менән дә була торған бер күренешкә иғтибар иттереп, шуны күҙгә элеп, һығымталар яһап, тәнҡитләгән һымаҡ һөйләп торҙо: "Ауылға ҡайтҡайным, - тине ул. - Бына берәм-берәм таныштар, туғандар сәләм биреп уҙа. "Ҡасан ҡайттың?" - тип һорай берәүһе. "Бөгөн ҡайттым", - тип яуаплайым уға. "Ҡасан китәһең? - тип һорай ул тағы ла. "Әллә, бер нисә көн булам әле", - тим мин. Хәл һорашыу шулай өҫтән-мөҫтән, һүҙ юҡта һүҙ булһын тигәндәй генә дауам итә. Был ғына түгел әле. Бына кемелер: "Һин бер ҙә ҡартаймайһың ул", - тип уҙҙы, күңел күтәрелде. Икенсеһе иһә: "Картайып киткәнһең", - ти, ҡыйын булып китте. Үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙә ябай ғына ихтирам тигәнде белмәй инде беҙҙең халыҡ. Күптән күрешмәгәнбеҙ икән, бер-беребеҙгә ысынлап та ҡартаймаған кеүек, туҙмаған кеүек күренәбеҙ икән, ниңә:"Бик матур күренәһең, афарин!"- тип хуплау белдермәҫкә? Хатта ҡартайған, туҙған хәлдә булғанда ла ниңә быны йөҙөнә ҡарап әйтергә, ти..."

Танышымдың һүҙҙәренә рәхәтләнеп көлдөм дә, былар бит уларҙың ябайлығынан, ихласлығынан килә, тип аҡлаған булдым ауыл кешеләрен. Ә шулай ҙа... Кеше күңеле яғымлы һүҙ, маҡтау көҫәй ҙә тора шул. Ул маҡтауҙа яһалмалыҡ, икейөҙләнеү, ялған өҫтөнлөк итһә лә хатта...

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

КЕМ АЛЫҠ?

# ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



Учалы районының башҡорт теле уҡытыусылары.

**2012 йылдың тәүге яртыһында гәзитһеҙ ҡалмаҫҡа теләһәгеҙ, уга яҙылырға һуңлап ҡуймағыҙ. Был хаҡта күрше-күләндәрегеҙгә, таныштарығыҙға ла еткерегеҙ, зинһар.**

**Декабрь айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәргә лә 2012 йыл өсөн "Дини календарь" бүләк итмәксебеҙ.**

Ә кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **270 һум**ға яҙыла алаһығыҙ - почта йәшниге юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ. Киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, редакцияға шылтыратығыҙ.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **228 һум**.

● Яҡын йәшәгәндәр редакцияибыҙҙа яҙылып, аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **240 һум**.

**Шулай итеп, гәзитебеҙҙең индексы - 50665, ярты йылға яҙылыу хаҡы - 348 һум 24 тин.**

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓2011 йылдың 15 декабрендә Рәсәй Президенты Михаил Бабичты Президенттың Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле итеп тәғәйенләү тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Дмитрий Медведев шулай уҡ үҙенең указы менән Григорий Рапотаны, икенсе эшкә күсеү сәбәпле, был вазифанан бушатты.

✓Иң яҡшы уҡытыусыларҙы дәртләндереүгә Башҡортостан Республикаһы 2012 йылда федераль бюджеттан 7,4 миллион һум аласаҡ. Тейешле бойороҡҡа РФ Хөкүмәте Премьер-министры Владимир Путин ҡул ҡуйған. Рәсәй Федерацияһы бюджетынан иң яҡшы уҡытыусыларға йөмғеһе 200 миллион һум бүленәсәк. Документҡа ярашлы, иң ҙур премия фондын Мәскәү (9 миллион һум), Краснодар крайы (8,6 миллион) һәм Мәскәү өлкәһе (8,2 миллион) аласаҡ. Дағстанға - 7,2 миллион, Татарстанға 5,6 миллион йүнәлтеләсәк.

✓Өфөлә Финляндияның һәм Рәсәйҙең бер нисә тәҙәләш комплексы предприятиеһы етәкселәренең эшлекле бәйләнештәр биржаһы үтте. Сара Европа эштәре буйынса һәм тышҡы сауҙа министры Александер Стубб етәкселегендәге Финляндия делегацияһының Өфөгә эш визиты сиктәрендә үткәрелде. Эшлекле бәйләнештәр биржаһында Финляндияның байтаҡ компанияларының генераль директорҙары ҡатнашты. Сара сиктәрендә Gebwell Оу компанияһының презентацияһы үтте, компания йылытыу һәм һыуытыу өсөн экологик яҡтан таҙа сараларҙа махсуслаша. Larmix Оу тәҙәләш компанияһы ла дөйөм тәҙәләштә ойоштороу буйынса партнерлыҡ программалары һәм килешеү нигеҙендә оҙайлы сроклы бәйләнештәр тәҡдим итте.

✓15-16 декабрҙә Өфөлә социаль туризм мәсьәләләре буйынса беренсе бөтә Рәсәй форумы үтте. Уны Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте менән берлектә Рәсәй Федерацияһының Спорт, туризм һәм йәштәр сәйәсәте министрлығы һәм Туризм буйынса федераль агентлыҡ үткәрҙе. Форумда 200-ҙән ашыу ҡатнашыусы теркәлгән.

✓Башҡортостан Хөкүмәте йортонда йәнә күп балалы 60 әсә "Әсәлек даны" миҙалдарын алды. Республиканың Премьер-министр урынбаҫары Фидус Ямалетдинов 31 район һәм ҡаланан килгән ҡатындарға миҙалдар һәм аҡсалата премиялар тапшырҙы. Улар араһында - хужабикәләр, уҡытыусылар, ауыл клубы, дарыухана, почта, ауыл хужалығы предприятиелары хеҙмәткәрҙәре.

*✓ Бүре тәбиғәттең үҙе кеүек боронғолоҡ символы, шуға күрә бүре кеүек уҡ борон барлыҡҡа килгән халыҡтар, милләттәр, эт саба тип бет артынан сапмай, ваҡланмай, хәйләләшә һәм алдаша белмәй.*

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# ЭТ ӨРӨР...

## бүре йөрөр



**Был әйтемдең ҡасан башлап телгә алынғанын белер өсөн эттәрҙең һәм бүреләрҙең донъяға яралған мәленә лә сәйәхәт яһау ихтыяжы тыуыр ине, моғайын. Ни өсөн тигәндә, күп кенә ғилми тикшеренеүҙәр шуны күрһәтә: эттәр һәм бүреләр бер ғаиләгә ҡарай.**

Генетика ғали йәнәптәре раҫлай быны. Ғөмүмән, эттәр һәм бүреләр генә түгел, шакалдар һәм койоттар ҙа ошо нәҫелдә тәшкил итә. Йәғни ошо дүрт төр дүрт аяҡлыларҙы: бүреләрҙе, эттәрҙе, койоттарҙы һәм шакалдарҙы үҙ-ара ҡарығыштырып ҡараһаң, уларҙан бүреттәр, бүркойоттар, бүршакалдар, шакалэттәр, койэттәр, койшакалдар, һ.б. көсөктәр тыуа. Ер шарындағы төрлө расаларға ҡараған меңәрләгән халыҡтар һәм ҡәбиләләр барыһы ла Әҙәм менән Һауанан таралған кеүек, был дүрт аяҡлылар һәм аҙау тешлеләрҙең тәүбабаһы булып бүре һанала.

Күп кенә ғалимдар борон-борондан бүреләр - айырым, эттәр айырым төр булған, тигән фекерҙе иҫбат итергә тырышһа ла, был ике төрҙең ДНК һәм хромосома берлеге уларҙың бер нәҫелгә барып ялғанғанлығын иҫбатлай. Был иҫбатлама - аксиома. Сөнки, әйтәйек, төлкөнө алып ҡараһаҡ, уның бүре, эт нәҫеленән үтә алыҫ тороуы тәбиғәттә төлкөбүре йәки төлкэт тигән заттың булмауы менән аңлатыла.

Швеция, Ҡытай, Иран, Австрия һәм Германия ғалимдары өйрәнеүенсә, эттәр бынан 16 мең йыл элек Ҡытайҙың Янцзы тигән ерҙең көньяғында барлыҡҡа килгән. Был дата һәм урын эттәрҙең барлыҡҡа килеүен ғилми тикшеренеү юлы менән өйрәнеү һөҙөмтәһендә билдәләнгән. Бындай иҫбатлауға килер өсөн ғалимдар 1576 эттең һәм 40 бүренең ҡанына, йөн составына һәм ауыҙ ҡыуышлығына ДНК-анализ үткәрә, компьютерҙа моделләштерә. Ғалимдар шундай һығымтаға килә: бынан тап 16 мең йыл элек Ҡытайҙың ошо урынында йәшәүселәр бүреләрҙе ҡулға эйәләштереп, үҙҙәренә өйрәтеп яҡынайтҡан, йәғни тәбиғәттә эт ошо рәүешле барлыҡҡа килгән.

Эттәр кешеләргә нисек кенә яҡынламаһын, өйрәнмәһен, уларҙа бик күп бүре инстинкттары һаҡланып ҡалғанын да билдәләй ғалимдар. Әйтәйек, эттәрҙең тота килеп бер сәбәпһеҙ өрөүен ғалимдар бүреләрҙең өйөр инстинкттарына бәйләй. Шулай уҡ эттәр йоҡлар алдынан ятыр урындарында өс-дүрт тапҡыр әйләнеп алыусан. Был гимнастика ла эттәрҙең бүре бабаларынан ҡалған ғәҙәте, йәғни бүреләр ошо хәрәкәт менән төндә йоҡлар урынының хәүефһеҙлеген тикшерә. Эттәрҙең таланып, мөйнәлеп бөткән һөйәктәрҙе ергә күмеүе лә бүреләрҙән килә. Бүреләр ҡаты аслыҡ кисергәндә күмеп ҡалдырған һөйәктәрҙе онтап үҙәк ялғай. Ҡыҫҡаһы, эттәрҙе хәҙерге заман ләғәтенә яраҡлаштырып әйткәндә, кешеләргә яҡынайған, цивилизацияланған, глобаләшкән бүре тип атарға ла мөмкин булыр ине.

Юғарыла килтерелгән дәлилдәр һәм һығымталар өсөн ғалимдар Ҡытайҙа күп һандағы бүре, эт һөлдәләрен антропологик яҡтан өйрәнгән. Был тикшеренеүҙәр унан алдағы осорҙа эттәр бөтөнләй булмаған, тигәнде һис тә аңлатмай. Сөнки тәүге бүреләрҙең һәм тәүге эттәрҙең һөлдәләре һаҡланмаған осор ҙа бар бит әле тарихта. Шул уҡ бүренең генетик йәше 40 миллион йылды тәшкил итә икән, эттәрҙең йәше 15 миллион йыл түгел тип кем әйтә ала? Шуға күрә бүреләрҙең нисек итеп кешеләргә һыйынып йәшәй башлауы хаҡында фәндә төрлө фараздар һәм ҡуҙаллауҙар бар. Әлбиттә, был фараздарҙың күбеһе логика рәүешендә барлыҡҡа килә. Әйтәйек, тәүтормош кешеләре ҡәбиләләр булып ойошоп, мәмерйәләрҙә йәшәгән осорҙан күпкә алда ер өҫтөндә ғифрит рәүешендә динозаврҙар, пронтозаврҙар һәм башҡа "заврҙар" тулып йөрөгән. Улар кешеләргә генә түгел, башҡа йән эйәләренә, шул иҫәптән бүреләргә лә көн күрһәтмәгән. Тап шул саҡта аслыҡтан ҡырылыр хәлгә еткән бүреләр һунарға барып, эре-эре мамонттарҙы аулаусы кешеләргә иғтибар иткән. Кешеләр табышын үлтергәндән һуң уны киҫәктәргә турап, мәмерйәләргә ташыған һәм унда бүреләргә лә өлөш сыҡҡан. Кем белә, бәлки тап ошо мәл эт тигән тоҡомдоң барлыҡҡа килеүе башланғандыр? Кем белә... Шунан һуң яйлап-яйлап кешеләр бүреләргә, бүреләр кешеләргә өйрәнә, яраҡлаша башлағандыр, тип уйланыла. Яйлап-яйлап бүреләр үҙҙәре лә кешеләргә һунарсылыҡ итеүҙә ярҙам күрһәткән, йәғни үҙҙәренең теше үтмәҫтәй, үлтерергә көсө етмәҫтәй януарҙар ятҡан урындарға эйәртеп алып барған, был юл менән үҙҙәре лә туйынған. Шулай итеп, яйлап-яйлап бүреләр өйөрө кешеләргә эйәреп йөрөй тора, уларҙың араһында бер-береһенән ҡурҡыу хисе ҡалмаған һәм эт ошо рәүешле барлыҡҡа килгән. Эттәрҙең бүреләрҙән барлыҡҡа килеүе хаҡындағы ошо иҫбатламаны, йә, кемегеҙ, кире ҡаға алыр? Уны кире ҡағып та, шул уҡ ваҡытта, ғалимдар ләғәте менән әйткәндә, лаборатор ысул менән иҫбатлап та булмай. Иҫбатлап булмай, әммә билдәле яҙыусы һәм ғалим Йыһат Солтанов яҙыуынса, әҙәм балаһы инә бүренең имсәген имгән, тигән иҫбатламаның нигеҙе, кем белә, бәлки тап ошо, йәғни бүренең эт формалашҡан дәүергә ҡайтып ҡалалыр. "Башҡорт" һүҙенең бер аңлатмаһында был һүҙҙең килеп сығыуын бүрегә бәйләү ҙә бар. Был фараз шулай уҡ уйландыра, һәр хәлдә бындай аңлатмала халҡыбыҙҙың бик борон формалашыуына ишара яһала.

"Эт өрөр, бүре йөрөр" әйтеменең асылына төшөнөргә тырышҡанда был ике төр дүрт аяҡлыны айырым зат итеп ҡараһаҡ, уның мәғәнәһен шулайыраҡ итеп әйтергә булыр ине: һинә абалаусылар ҙа, юлына, эшеңә ҡаршы сығыусылар ҙа булыр, әммә һин үҙеңдең көҫөңә, маҡсатыңдың дөрөҫлөгөнә ышанаһың икән, бер нәмәгә лә ҡарама, үҙ юлыңда бул, үҙ эшеңде бел...

Әммә инде был әйтемде сәбәп-һөҙөмтә схемаһында ҡараһаҡ, йәғни юғарыла килтергән ғилми раҫлауҙар, фараздар, ҡуҙаллауҙар аша үткәрһәк, бөтөнләй башҡасараҡ һығымталар яһарға мөмкин булыр ине: бүре тәбиғәттең үҙе кеүек боронғолоҡ символы, шуға күрә бүре кеүек уҡ борон барлыҡҡа килгән халыҡтар, милләттәр, эт саба тип бет артынан сапмай, ваҡланмай, хәйләләшә һәм алдаша белмәй, оҫҡартын, арзан зауыҡҡа бирелмәй, болғансыҡ һыуҙан балыҡ һөҙөп байлыҡ тупламай, ниндәй генә заман елдәре иҫмәһен, улар һыңғайына борғоланмай, флюгер була алмай, донъя үҙгәрә тип йөҙ йылға ҡырҡ төрлөгә үҙгәрә алмай, үҙенән күпкә һуңыраҡ барлыҡҡа килгән эт өрә тип ҡото алынмай, һәүетемсә генә донъя буйлап йөрөп ята...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*ИШАРА*

# БОЛҒАУЫР БИТ ЗАМАН - өндәшмәй ҡалырмы шағир!

**Архивымда ҡаҙына торғас, 2000 йылдарҙа әсенеп яҙған бер шиғырымды табып алдым. Бөгөнгө ауаздаш кеүек. Шиғыр бик болғауыр, төрлө кимәл һайлауҙар үткән осорҙа яҙылғайны. Болғансыҡ һыуҙа балыҡ тоторға тырышыусылар һәр заманда ла булған, әле лә аҙ түгел. Ә беҙ - бик ышаныусан, эсебеҙҙәге тышыбыҙҙа булған халыҡ бит инде. Яҡшыраҡ булыр, тип уйлап, кемгәлер ышанып, урамдарға сығабыҙ. Хәҙер инде халыҡты майҙандарға интернет аша ғына йыялар. Әллә күпме транспаранттар, байраҡтар, тегенеһе-быныһы. Уларына бит аҡса кәрәк. Тимәк, кемдер түләй. Түләй икән, артығы менән ҡайтарырға ниәтләнә. Баҙар заманы бит... Ҡыҫҡаһы, бына ошондай шиғыр ине.**

### Һүтәбеҙ...

Беҙҙең өй - өймә ни,
Тинеләр бер заман,
Йорт тотҡан ирҙәрҙе һүктеләр,
Яңыһы кәрәк, тип,
Еллеһе кәрәк, тип,
Нигеҙҙе бергәләп һүттеләр.
Ауҙы ил, ҡоланы,
Таралды таяуҙар,
Ҡоршалмай, ялғанмай ярсыҡтар,
Ил ине - ни ҡалды,
Ни күреп, ни алдыҡ,
Тип шул саҡ ҡарғанды ҡарсыҡтар.
Түҙәйек, төҙәйек,
Һынмайыҡ, тынмайыҡ,
Тинек тә тағы ил нығыттыҡ.
Ни мәлдә, ни хәлдә
Ауғанын күтәрҙек -
Берәүҙәр тағы ла онотто.
Тағы ла табыла
Сыраҡтан ҡалғандар:
Беҙҙең ил - илме ни, йәнәһе!
Буйратып һыуҙарҙы,
Болғатып донъяны,
Фетнәләр килтерә бәләһен.
Тағы ла һүтәйек,
Тағы ла көтәйек,
Үрттән һуң урмандар үҫерен.
...Бер һүтеп, бер өйөп
Булышҡас туктауһыҙ,
Мандымай илебеҙ, бүҫереп.
Ил һүткән арала
Мөлкәт тә тарала
Күҙ ҙә юҡ, ҡолаҡ та - хөрриәт!
Керергә өй ҙә юҡ,
Төҙөргә көй ҙә юҡ,
Йәшәү юҡ - бары тик бар ниәт!

**Гүзәл СИТДИҠОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Бангладеш Халыҡ Республикаһы Рәсәйҙән яҡынса ике миллион тонна иген һатып алырға уйлай. Ил төбәктәре араһынан төп тәьмин итеүсе тип Башҡортостан ҡарала. Бангладеш Республикаһы Аҙыҡ-түлек һәм ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының аҙыҡ-түлек мәсьәләләре буйынса секретары Барун Дев Митра билдәләүенсә, Бангладеш үҙ сиратында Рәсәйҙе, Башҡортостанды балыҡ, диңгеҙ продукттары, сәй, бал менән тәьмин итәсәк.

✓ Үҙәк хәрби округы ғәскәрҙәре командующийы "Дин тотҡан хәрби хеҙмәткәрҙәр менән эшләүсе органдар эшмәкәрлеге тәртипкә һалыу тураһында"ғы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Унда төрлө дини конфессияларҙан булған һалдаттар һәм офицерҙар менән хеҙмәттәшлек итеү буйынса вазифалы кешеләрҙең статусы, вәкәләттәре һәм бурыстары билдәләнгән.

✓ Дәүләт эсендәге дөйөм файҙаланыуҙағы тимер юл транспортында юл йөрөүгә тариф ставкалары 2012 йылдың 1 ғинуарынан 10 процентҡа артасаҡ, тип хәбәр итә РФ Тарифтар буйынса федераль хеҙмәт. Пассажирҙар ташыуға бәйле өҫтәмә хеҙмәттәргә хаҡтар ҙа ошондай уҡ күләмгә артасаҡ. Башҡортостан эсендә юл йөрөүгә килгәндә иһә, республика биләмәһендә электр поездарында юл йөрөүгә хаҡтарҙы арттырыу планлаштырылмай.

✓ Башҡортостанда әүәлгесә ир-егеттәргә ҡарағанда эшһеҙ ҡатын-ҡыҙҙар күберәк. Бөгөнгө көндә улар республикала 62 процент самаһы. Ир-егеттәр - 38 проценттан аҙ ғына күберәк. Шуларҙың 24 проценты рәсми рәүештә мәшғүллек хеҙмәттәрендә иҫәптә торған эшләмәгән йәштәр өлөшөнә тура килә. Пенсия йәшенә етеп килгәндәр иҫәбе уларҙың составында - 10 процент самаһын, инвалидтар 7,5 процентты тәшкил итә. Әлеге ваҡытта төбәктә рәсми рәүештә теркәлгән 28 мең самаһы граждан иҫәпләнә. Теркәлгән эшһеҙҙәрҙең күбеһе - ҡала кешеләре (62 процент).

✓ Бер ай эсендә аҙыҡ-түлек продукттарына хаҡтар 0,4 процентҡа артты. Башҡортостанстат тауар һәм хеҙмәттәргә ҡулланыусылар хаҡтары индексын баҫтырып сығарҙы. Аҙыҡ-түлеккә ҡарамаған тауарҙар ноябрҙә 0,5 процентҡа ҡиммәтләнде. Хеҙмәттәргә хаҡ 1,1 процентҡа артты. Дөйөм алғанда йыл башынан ҡулланыусылар хаҡтары индексы республикала 106,2 процент тәшкил итте. Уртаса Рәсәй буйынса был күрһәткес бер аҙ түбәнерәк - 105,6 процент.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ЕРҘЕ КЕМ АЛЫҠ?

**Башҡортостан Хөкүмәте бер тапҡыр һәм бушлай ер алыу хоҡуғына эйә булған граждандарға индивидуаль торлаҡ төҙөү өсөн ер участкалары бүлеү өсөн кәрәкле документтар исемлеген раҫланы.**

Закон менән был хоҡуҡҡа эйә булған граждандарҙың биш төп категорияһы билдәләнде:

-торлаҡҡа мохтаж булараҡ иҫәптә торған граждандар;

-торлаҡҡа мохтаж булараҡ иҫәптә тормаған йәш ғаиләләр өсөн (ир һәм ҡатындың икеһенә лә 35 йәш тулмаған булырға тейеш), йәки тулы булмаған ғаиләләр (йәше 35-тән артмаған ир йәки ҡатын), һәм торлаҡ ҡануниәтенә ярашлы торлаҡҡа мохтаж, торлаҡ милексеһе булмаған бер һәм унан да күберәк балаһы булған ғаиләләр;

-торлаҡҡа мохтаж булараҡ иҫәптә тормаған, торлаҡ милексеһе булмаған бюджет өлкәһендәге ойошмала эшләүсе хеҙмәткәрҙәр, билдәһеҙ срокка төҙөлгән хеҙмәт килешеүе, йәки өс йылдан да кәм булмаған срокка төҙөлгән хеҙмәт килешеүе буйынса эшләгән хеҙмәткәрҙәр;

- өс һәм унан да артыҡ балиғ булмаған бала тәрбиәләүсе граждандар;

- инвалид бала тәрбиәләүсе граждандар.

## НАРКОМАНДАРҒА ТЕЙЕШЛЕ ЯЗА

**Яҡын арала Рәсәйҙә наркотиктарҙы тараткан өсөн генә түгел, ә ҡулланған өсөн дә яуаплылыҡҡа тарттырыуҙары ихтимал.**

РФ-ның Наркотиктар әйләнеше буйынса контроль хеҙмәте директоры Виктор Иванов белдереүенсә, был ҡарарҙың киләһе йылдың яҙында ҡабул ителеүе көтөлә, әлегә кәрәкле документтар пакеты әҙерләнгән. Белгестәр фекеренсә, наркотиктар ҡулланған өсөн яуаплылыҡ индереү бик кәрәк, һәр наркоман наркотиктарҙы төүҙә үҙе ҡуллана, аҙаҡтан башҡаларҙы йәлеп итә башлай. Улар, үҙ сиратында, тағы ла башҡа кешеләрҙе наркотиктарға өйрәтә. Әлеге ваҡытта Рәсәйҙә наркомандар Евросоюз илдәренең бөтәһен бергә алғанда ла күберәк. Закон наркомандарға йә енәйәти яуаплылыҡҡа тарттырыуҙы, йәки үҙ ирке менән дауаланыуҙы һайлай алыу мөмкинлеген бирәсәк.

ҺАЙЛАУҘАР ҺӘМ...

# МӘСКӘҮГӘ КЕМДӘР ЮЛЛАНА?

**Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышының алтынсы саҡырылыш Дәүләт Думаһына депутаттар һайлау һөҙөмтәләре буйынса "Берҙәм Рәсәй" партияһынан төбәк исемлеге өсөн республика һайлаусылары 70,5 процент тауыш бирҙе. Был күрһәткес буйынса Башҡортостан Рәсәй төбәктәре араһынан лидерҙар иҫәбенә инде.**

4 декабрҙә һайлауҙа йыйылған тауыштарҙың юғары проценты "Берҙәм Рәсәй" партияһының төбәк бүлексәһенән кандидаттар өсөн 12 депутат мандаты булдырҙы. Билдәле булыуынса, төбәк исемлегендә беренсе килгән Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов республика башлығы вазифаһында ҡалыуы хаҡында иғлан итте. Шулай итеп, 12 кеше "Берҙәм Рәсәй" партияһының төбәк бүлексәһенән Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Йыйылышының алтынсы саҡырылыш Дәүләт Думаһына депутат булыусылар:

1. Крашенинников Павел Владимирович
2. Рәхмәтуллина Зөһрә Йыһанур ҡыҙы
3. Качкаев Павел Рюрикович
4. Йосопов Марсель Харис улы
5. Дегтярёв Александр Николаевич
6. Фәхретдинов Иршат Юнир улы
7. Баталова Рима Аҡбирҙе ҡыҙы
8. Мәхмүтов Әнүәр Әнәс улы
9. Климов Виктор Владимирович
10. Мырҙабаева Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы
11. Мәрҙәншин Рафаэль Мирхәтим улы
12. Поцяпун Владимир Тимофеевич

...ТӘҒӘЙЕНЛӘҮҘӘР

## ПРЕМЬЕР-МИНИСТРҘЫҢ ЯҢЫ УРЫНБАҪАРЫ



**Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов үҙенең Указы менән Салауат Сәғитовты республика Хөкүмәтенең Премьер-министры урынбаҫары итеп тәғәйенләне.**

**Белешмә өсөн.** Салауат Тәлғәт улы Сәғитов 1977 йылдың 22 апрелендә Өфө ҡалаһында тыуған. 1999 йылда Өфө дәүләт авиация техник университетын тамамлай. Хеҙмәт эшмәкәрлеген ошо уҡ йылда Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәтендә әйҙәүсе белгес булып башлай. Төрлө йылдарҙа Өфө хакимиәтенең мәҙәниәт идаралығы начальнигы урынбаҫары, идаралыҡ рәйесе вазифаһын башҡарыусы, артабан Өфө хакимиәтенең йәштәр сәйәсәте буйынса комитет рәйесе, Йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитеты рәйесе, БР йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм министры урынбаҫары була. 2010 йылдан Өфөнөң Киров районы хакимиәте башлығы вазифаһын биләй.

Салауат Сәғитов - фән һәм техника өлкәһендә дәүләт республика йәштәр премияһы лауреаты.

## ТОРЛАҠ-КОММУНАЛЬ ХУЖАЛЫҠҠА...



**Башҡортостан Республикаһы Президенты Указы менән Сергей Афонин Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры - Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры итеп тәғәйенләнде.**

Быға саҡлы Сергей Афонин Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары вазифаһын үтәгәйне. Хәҙер иһә ул министр вазифаһын да бергә яраштырасаҡ.

**Белешмә өсөн.** Сергей Иванович 1959 йылдың 25 ғинуарында Күмертау ҡалаһында тыуған. Өфө дәүләт авиация техник университетын һәм БР Президенты ҡарамағындағы Дәүләт хеҙмәте һәм идараһы академияһын тамамлаған. Иҡтисад фәндәре кандидаты. Хеҙмәт биографияһы башлыса Күмертау ҡалаһы һәм ундағы сәнәғәт предприятиелары менән бәйле. Ул 1996-2010 йылдарҙа Күмертау ҡала хакимиәте башлығы була.

## ӨФӨ БАШЛЫҒЫ ЯҢЫРҘЫ



**Өфө ҡала округы Советының сираттағы ултырышында баш ҡала хакимиәте башлығы итеп бер тауыштан быға саҡлы Башҡортостан Республикаһының торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры вазифаһын башҡарған Ирек Ялалов һайланды. Рәсәй Федерацияһының Федераль Йыйылышы - Дәүләт Думаһына депутат итеп һайланыуы сәбәпле Өфөнөң элекке ҡала башлығы Павел Качкаевтың вәкәләттәре ваҡытынан алда туктатылды.**

Ирек Ялаловты Өфө мэры вазифаһына тәҡдим иткән БР Хөкүмәте Премьер-министры Азамат Илембәтов был кандидатураның Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов менән килешелгән булыуын билдәләне.

**Белешмә өсөн.** Ирек Ишмөхәмәт улы Ялалов 1961 йылдың 27 ғинуарында тыуған. Өфө дәүләт нефть техник университетын һәм Әске эштәр министрлығының Өфө юридик институтын тамамлаған.

Хеҙмәт эшмәкәрлеген 1983 йылда "Эре панелле йорттар төҙөү" тресында мастер, прораб булып башлай. ВЛКСМдың Октябрь район комитетында һәм КПСС-тың Октябрь район комитетында, төрлө төҙөләш һәм инженерлыҡ предприятиеларында етәксе вазифаларҙа эшләй. Өфөнөң Октябрь районы хакимиәте башлығының төҙөләш һәм иҡтисад буйынса урынбаҫары була. Һигеҙ йыл дауамында Өфөнөң Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы начальнигы, артабан Ҡала йәшәйешен тәьмин итеү идаралығы начальнигы вазифаларын биләй. 2009 йылда Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары итеп тәғәйенләнә. 2010 йылдың 9 ноябренән Башҡортостандың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығын етәкләй.

## ЯҢЫ ХАКИМИӘТ БАШЛЫҠТАРЫ

**Киров районын быға саҡлы Өфө ҡала округы хакимиәтенең Халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү идаралығы начальнигы булып эшләгән Динар Хәлилов етәкләйәсәк.**

Өфөнөң Ленин районына 2001 йылдан етәкселек иткән Николай Солодовников та, икенсе эшкә күсеү сәбәпле, элекке вазифаһынан китте. Район менән хәҙер Владимир Нагорный етәкселек итәсәк. Ул әлегә тиклем Киров районы башлығы урынбаҫары булып эшләгәйне.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостан Республикаһының икенсе саҡырылыш Йәмәғәт палатаһы ағзалары халыкты 19 - 22 декабрҙә Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 50 адресы буйынса "Нефтсе" мәҙәниәт һарайының 202-се бүлмәһендә ҡабул итәсәк. Тулыраҡ мәғлүмәт өсөн: www.op-rb.ru

✓Бөгөндән Өфөлә 118 шыршы баҙары эшләй башлаясаҡ. Ошондай йәнә 15 баҙарҙы баш ҡаланың аҙыҡ-түлек магазиндары селтәре ойоштораcаҡ. Шыршы баҙарҙарының күбеһе Өфөнөң Калинин районында урынлашҡан, был районға 27 сауҙа нөктәһе тура килә. Киров районында йәшел ҡупшыҡайҙар тәҡдим итеүсе 24 баҙар эшләйәсәк. Совет, Октябрь һәм Орджоникидзе райондарына 21, 16 һәм 14 шыршы баҙары тура килә. Ленин һәм Дим райондары халҡы ла шыршыһыҙ ҡалмаясаҡ. Улар өсөн Ленин районында - ун, Дим бистәһендә алты баҙар ойошторолған.

✓Өфөлә урынлашҡан 87 һаулыҡ һаҡлау объектында 2010, 2011 йылдарҙа янғын сығыу осрағы күҙәтелмәгән. Һуңғы тикшереүҙәр һаулыҡ һаҡлау учреждениеларының барыһының да янғынға ҡаршы автоматика һәм янғын тураһында хәбәр итеү ҡорамалдары менән йыһазландырылыуын асыҡлаған. Шулай ҙа эвакуация ваҡытында сығыу урындарының йоҙаҡҡа бикләнеүе, тәҙрәләрҙә металл рәшәткәләр тороуы, ҡулланыу шарттарын боҙоп электр приборҙары менән файҙаланыу, подвалдарҙың ташландыҡ хәлдә булыуы йәки уларҙа төрлө өҫтаханалар урынлашыуы кеүек етешһеҙлектәр ҙә табылған.

✓Өфөнөң Опека һәм попечителлек буйынса идаралығы "Минә ғаилә кәрәк" яңы социаль проекты тәҡдим итә. Проект атай-әсәй наҙынан мәхрүм булған етем балаларға йәнә ғаилә табырға ярҙам итеү маҡсатында ойошторола. Идаралыҡ сайтында булдырылған "Минә ғаилә кәрәк" бүлегендә етем балаларҙың фоторы һәм улар тураһында мәғлүмәт урынлаштырылған. Идаралыҡ телефоны: 279-91-80, 279-91-84.

✓Өфөлә МЕГА сауҙа үҙәге асылды. Был үҙәк Рәсәйҙәге ИКЕА компанияһының инвестицион проекты булып тора. Бында 3 мең эш урыны булдырылған. Сауҙа үҙәгендә 187 ҡуртымға алыусының магазиндары эшләйәсәк. Килеүселәр өсөн бында кафе һәм рестораң, каток һәм балалар майҙансыҡтары эшләй.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ҺАБАНТУЙ КИМӘЛЕНӘН...

## олимпия кимәленә

**Был аҙнала Өфөнөң "Динамо" спорт комплексында көрәш буйынса Рәсәй Беренселеге һәм Чемпионаты үтте. Унда илдең егерме һигеҙ төбәгенән ике йөҙгә яҡын көрәшсе чемпион титулы өсөн көс һынашты. Бындай ҙур кимәлдәге бәйге Башҡортостанда 2001 йылдан алып уҙғарылғаны юҡ.**




Ир-егеттең ике юлдашы бар: береһе - батырлыҡ, икенсеһе - тәүәккәллек, ти халыҡ. Көрәшсе өсөн бигерәк тә был сифаттарҙың кәрәкле икәнен ошо бәйге лә күрһәтте. Был чемпионатта республикала быға тиклем билдәлелек яулап өлгөргән батырҙарҙан тыш, яңы исемдәр ҙә яңғыраны. Ҡыйғы районы Арыҫлан ауылы мәктәбенең 10-сы синыф уҡыусыһы Артур Зөлҡәрнәйев был турнирҙың ысын асышы булды, тиһәк тә була. Көрәшсенең улы ла көрәшсе була, республикала билдәле йәш көрәшсе Вадим Зөлҡәрнәйевты ла, Артурҙы ла аталары Валерик көрәш серҙәренә өйрәтә. Артур йәш булыуына ҡарамаҫтан, икенсе тапҡыр Рәсәй чемпионы исеменә лайыҡ булды.

Әйткәндәй, быйылғы көрәшселәр араһында үҙҙәре тренер булып эшләүсе егеттәр күберәк ине. Тимәк, улар урынына киләсәктә лайыҡлы алмашсылар киләсәк. Мәҫәлән, өлкәндәр араһында 70 килограмм ауырлыҡта чемпион исемен яулаған Алик Яҡупов бөгөн Стәрлетамаҡ физик культура институтында эшләй. Ун йыл элек Башҡортостанда үткән чемпионатта беренсе тапҡыр Рәсәй чемпионы булған Алик үҙенең чемпион титулын был юлы ла раҫлай алды. 100 килограмдан артыҡ ауырлыҡта республика данын яҡлаусы Юрий Сабанов та ошо уҡыу йортонда белем бирә. Билбаулы көрәш буйынса донъя чемпионы Альберт Рәхмәтуллин да тағы бер тапҡыр Рәсәй чемпионы исемен "яңыртты". Өс йәшенән көрәш балаҫына сыҡҡан Альберт үҙенең тыуған ауылы Ергәндә дүртенсе йыл инде балалар менән эшләй, 70-кә яҡын үҫмер унда көрәш менән профессиональ шөғөлләнә.

Шуныһы һөйөнөслө, бындай чемпионаттар көрәште популярлаштырыу йәһәтенән ғәйәт ҙур әһәмиәткә эйә. Ул милли спорт төрөн һабантуй кимәленән чемпионаттар кимәленә күтәреп кенә ҡалмай, шул юғарылыҡтан ошо өлкәләге ниндәйҙер проблемаларға иғтибар ҙа йүнәлтә. Башҡорт һәм татар милләте араһында көрәш иң киң таралған спорт төрҙәренән һанала. Мәҫәлән, бөгөнгө көндә Татарстанда яҡынса 35-40 мең кеше көрәш менән шөғөлләнә. Беҙҙә был һан егерме мең тирәһе, тиһәләр ҙә, көрәш ундай киң массаларҙы йәлеп итә алмай әлегә. Бының үҙенә күрә сәбәптәре лә бар. Республикала 2012 йылға тиклемге милли көрәш буйынса маҡсатлы программа ҡабул ителеп, Милли көрәш һәм билбаулы көрәш буйынса федерация төҙөлөп, баш ҡалала балаларҙы был спорт төрөнә йәлеп итеү йәһәтенән байтаҡ эштәр башҡарылһа ла, әле был йүнәлештә проблемалар етерлек. Көрәш беҙҙең республикала ла тейешле кимәлдә үҫеш алһын өсөн урындағы властың был мәсьәләгә йөҙ менән боролоуы кәрәк, тип билдәләне тренерҙар.

Бынан бер нисә йыл элек кенә Рәсәйҙең Милли көрәш буйынса федерацияһы Халыҡ-ара көрәш стилдәре берләшмәһе федерацияһы (FILA) составына ингәйне. Федерация президенты Йәүҙәт Минниханов билдәләүенсә, хәҙер спорттың күп кенә олимпия төрҙәрендә пассивлыҡ күҙәтелә. Шуға ла көрәш кеүек милли төрҙәр был ойошма тарафынан ниндәйҙер ярҙам һәм иғтибар күрә икән, сама менән ун йылдан көрәштең олимпия уйындары реестрына инеүе лә ихтимал. Бының өсөн турнирҙар үткәрергә һәм, әлбиттә, ул бәйгеләрҙә көрәшерлек спортсылар әҙерләргә кәрәк. FILA рөхсәт бирһә, 2013 йылда Ҡаҙанда үтәсәк универсиадала билбаулы көрәштең классик төрөндә мотлаҡ милли көрәш буласағын белдерҙе Йәүҙәт Минниханов.

Был чемпионат судьяларҙың эшендә лә күп етешһеҙлектәр булыуын асыҡларға мөмкинлек бирҙе, шуға ла профессиональ судьялар әҙерләүсе курстар асыу һәм уларға имтихандар ойоштороу кәрәклеге лә, уҡыу йорттары факультеттары эргәһендә спорттың милли төрҙәре буйынса белем биреүҙе яйға һалыу ҙа көнүҙәк мәсьәлә.

Шулай ҙа көрәште массалы спорт төрө итәм, тиһәң, баланы уға мәктәп йәшенән үк йәлеп итеү кәрәк, тигәйне беҙҙең менән әңгәмәлә СССР-ҙың спорт мастеры, тәжрибәле тренер Фәнис Харрас улы Уразбахтин. Бының өсөн спорт мәктәптәре базаһында көрәш буйынса махсус йүнәлештәр булдырыу мөһим. Сөнки бөгөн мәктәп спартакиадалары ғына баланы профессиональ спортҡа ылыҡтыра алмай. Етмәһә, белгестәр һәм тренерҙар мәктәп спартакиадаһы исемлегенә көрәш, биатлон, рус лаптаһы, гер күтәреү кеүек профессиональ спорт төрҙәрен индереүгә ҡаршы. Уҡыусыларға физик тәрбиә биреү һәм БР олимпия резервын әҙерләү идаралығы директоры Рәшит Рушан улы Кәримов был төрҙәрҙең мәктәп программаһына инмәүе, уларҙы ойоштороу буйынса белгестәр, иң мөһиме, шарттар булмауын белдерҙе. Һөҙөмтәлә, был спорт төрө менән профессиональ шөғөлләнмәгән уҡыусыларҙы буш урындарҙы тултырыу өсөн генә ярыштарға алып йөрөүҙәр күп йәрәхәттәргә алып килә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рәсәй беренселеге һәм чемпионатында ике йәш категорияһында ла Башҡортостан командаһы Татарстандан ғына ҡалышып, икенсе урын яуланы. Өлкәндәр араһында өсөнсө урынға Пермь крайы һәм Киров өлкәһе, ә үҫмерҙәр араһында Пермь крайы һәм Төмән өлкәһе сыҡты. Өлкәндәр араһында Рәмил Ғәлимов (60 кг), Алик Яҡупов (70 кг), Альберт Рәхмәтуллин (75 кг), Рөстәм Исламов (85 кг) - беренсе, Рушан Ильясов (65 кг), Наил Мөхәмәтйәнов (80 кг), Илдар Моратов (90 кг), Юрий Сабанов (100 кг ашыу) - икенсе урын алды. Үҫмерҙәр араһында Артур Нурмөхәмәтов (50 кг), Артур Зөлҡәрнәйев (75 кг) - беренсе, Илдар Баһауетдинов (60 кг), Рөстәм Кәшәфетдинов (65 кг), Дим Хәйруллин (70 кг), Руслан Шәйхетдинов (80 кг ашыу) - икенсе, Фәдис Ҡотлогилдин (55 кг) өсөнсө урын яуланы.**

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

ҺОРАУ-ЯУАП

## БУШЛАЙ БИРМӘҪТӘР

**Мираҫ буйынса атайыма ауыл өйө һәм уның янындағы 8,5 сотый ер тейҙе, документтары тәртиптә. Ошо участка янында 10 сотый картуфлыҡ ере лә бар. Беҙ уны ҡуртымға алып файҙалана инек, сөнки хосусилаштырырға рөхсәт итмәйҙәр. Был дөрөҫмө?**

- Өҫтәмә ер участкаһына хоҡуғығыҙҙы ғәмәлгә ашырыу өсөн район хакимиәтенә ғариза яҙығыҙ. Ләкин шуны ла онотмағыҙ: әгәр элек һеҙ был ер участкаһын ҡуртымға алып файҙаланыу тураһында килешеү төҙөгән булһағыҙ, уны бушлай үҙ милкегеҙгә күсереү мөмкин түгел.

## СИКТӘРҘЕ БИЛДӘЛӘҮ

**Баҡсам участкаһының сиктәрен билдәләп сығырға уйлайым. Милекселек хоҡуғы теркәү тураһында таныҡлыҡ һәм кадастр номеры бар. Ә күрше ер биләүселәр яғынан сиктәрҙе билдәләү тураһындағы килешеү актына кем ҡул ҡуйырға тейеш? Уларҙың ҡулында ниндәй документтар булырға тейеш?**

-"Күсемһеҙ милектең дәүләт кадастры тураһында" федераль закондың 3-сө өлөшөндәге 39-сы статьяла әйтелеүенсә, сиктәрҙе билдәләү буйынса килешеү күрше ер участкалары менән милекселек, ғүмерлеккә ҡалдырылған мираҫсылыҡ, даими файҙаланыу һәм ҡуртымға алып файҙаланыу хоҡуҡтарына эйә булған кешеләр тарафынан ғәмәлгә атҡарыла. Күршеләрегеҙҙең ер менән файҙаланырға хоҡуҡ биреүсе документтары менән ҡыҙыҡһынығыҙ. Был дәүләт акты, файҙаланыуға йәки милекселеккә хоҡуҡ биреүсе таныҡлыҡ милекселек хоҡуғын йәки ер участкаһына килешеүҙе дәүләт теркәүе тураһында таныҡлыҡ булырға мөмкин. Әгәр ҙә ер участкаһына хоҡуҡ тейешенсә законлаштырылмаған булһа, ер участкаһы сиктәрен урындағы үҙидаралыҡтың тейешле органдары аша хәл итергә тырышығыҙ.

## БАШҠА ЮЛДАРЫН ЭҘЛӘГЕҘ

**Беҙҙең баҡсасылыҡ ширҡәтендә яңы милексе, тик ул беҙҙең ширҡәткә ағза булып инергә лә, ҡуртым килешеүе төҙөргә лә теләмәй. Шул уҡ ваҡытта ул ширҡәт биләмәһендәге бөтә уңайлыҡтар менән файҙалана. Беҙ уның электр энергияһы менән файҙаланыуына сик ҡуя алабыҙмы?**

- Коммерцияла булмаған баҡсасылыҡ ширҡәтендә баҡса эштәре алып барыу өсөн унда йә ағза булып тороу кәрәк, йә булмаһа, инфраструктура объекттары менән файҙаланыу тәртибе тураһында баҡсасылыҡ ширҡәте менән килешеү төҙөү шарт. Һеҙгә килешеү проектын әҙерләп, уны дөйөм йыйылышта раҫларға һәм яңы баҡсасы исеменә ебәрергә кәрәк. Әгәр ул килешеүгә ҡул ҡуйыуҙан баш тартһа, инфраструктура объекттары менән файҙаланыу тәртибе тураһындағы килешеүҙе мәжбүри үтәтеү тураһында юллау менән судҡа мөрәжәғәт итергә мөмкин. Ә инде уның йортона электр энергияһы биреүҙе туҡтатыуға һеҙҙең хоҡуҡ юҡ, мәсьәләне башҡаса хәл итеү юлдарын эҙләргә кәрәк.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



## Организм хәлһеҙләнһә

❖ 300 грамм әстерхан сәтләүеге, 300 грамм күрәгә, 300 грамм йөҙөм, 2 лимон (тышы менән) алып, уларҙың барыһын да ит турағыс аша үткәрергә һәм 300 грамм бал өҫтәргә. Көнөнә 1-2 балғалаҡ ашарға. Һыуыҡҡыста һаҡларға.

❖ Традицион Тибет медицинаһына ярашлы, имбир (тамыры эфир майҙарына бай тропик үҫемлек) организмдағы энергия хәрәкәтен һәм балансын тергеҙә, шуға ла иртән ас ҡарынға бер шәшке имбир сәйе эсеү көн буйына етерлек көс-ҡеүәт бирәсәк.

❖ Арыуҙы бөтөрөү һәм йөрәктең эшмәкәрлеген еңеләйтеү, көс йыйыу өсөн алма һеркәһе ҡабул итергә мөмкин. 1 стакан һыуға 1 ҡалаҡ алма һеркәһе һәм 1 балғалаҡ бал өҫтәп, 10-15 көн дауамында 1-2 тапҡыр ашар алдынан йәки ашағандан һуң ҡабул итергә.

❖ Бөрйән урмандарында бәғәнәш тип атап йөрөтөлгән үлән үҫә. Белгестәр уны воронец колосовидный йәки красноплодный тип йөрөтә. Минең әсәйем сайыр йыйыу мәлендә шуның тамырын йыя торғайны. Организм арып киткән саҡта был тамырҙың берике сыбыҡсаһын бер стакан ҡайнар һыуҙа бешереп, ас ҡарынға көнөнә 2-3 тапҡыр эсә ине. Борон әсегән балға ла бәғәнәш өҫтәгәндәр, ауыр эштән һуң был балды эсһәң, шунда уҡ көс итеп киткән.

## Отит

❖ Йоҡлар алдына 15 минут алда һарымһаҡтың бер тешен иҙеп, уға 2 тамсы зәйтүн йәки камфора майы өҫтәргә. Килеп сыҡҡан ҡатнашманы марляға һалып, филтә итеп төрөп, ҡолаҡ эсенә ҡуйырға. Әсетеү тоя башлағас та филтәне алырға.

❖ Эмаль кәстрүлгә бер стакан һыу ҡойоп, биш лавр япрағы төшөрөгөҙ һәм ҡайнау хәленә килтереп, 2-3 сәғәткә таҫтамалға урап, төнәтергә ҡуйығыҙ. Килеп сыҡҡан ҡатнашманы ауыртҡан ҡолаҡҡа 8-10 тамсы тамыҙырға, 2-3 ҡалаҡ эсергә. Дауаны 3-4 тапҡыр ҡабатларға.

❖ Ошо уҡ рецепты һуған менән эшләргә була. Һуған иҙелмәһен марляға төрөп, ҡолаҡҡа ҡуйырға һәм йылы берәй әйбер менән ҡапларға. Дауаны йоҡлар алдынан башҡарырға. Ғәҙәттә, бындай дауанан һуң ауырыу бер нисә көндә үтеп китә.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**




# АТА-ӘСӘ ХАҠЫ...

## бала өсөн иң олоһо

**Был донъяла һәр кешенең бер-береһе алдында бурыстары бар. Уларҙың иң олоһо - бала иңендәге ата һәм әсә хаҡы икәнлеге бер кемгә лә йәшерен түгел.**

Ата менән әсә үҙ балаларының бәхете өсөн көнө-төнө тырышыр, тәрбиә ҡылыр, мәктәптә уҡытыр, һөнәргә өйрәтер. Был юлда кисергән ҡыйынлыҡтары, күңелдәрендә тамыр йәйгән шәфҡәттәре яуапһыҙ ҡалып, йәҙҙән береһенә булһа ла яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ менән яуап бирелмәһә, үтә ауыр хәл булыр.

Ҡарт һәм зәғиф, хәлһеҙ атаһын күтәреп йөрөгән, ашатып-эсергән бер инсафлы зат, һүҙ уңайы килеп: "Эй, мөхтәрәм атам! Сабый ваҡытымда мине нисек тәрбиәләгән булһағыҙ, һеҙҙе лә шулай тәрбиәләйем. Уйлауымса, аталыҡ хаҡын үтәнем һәм яҡшылыҡ менән яуап ҡайтарҙым", - тигәйне. Быға яуап итеп атаһы: "Эй, ғәзиз улым! Һинән Аллаһы Тәғәлә риза булһын! Тәрбиәң өсөн рәхмәт белдерәм. Ләкин мин һине егетлек көндәреңдә күреп рәхәтләнеү ниәте менән оҙон ғүмерле һәм сәләмәт булыуҙы өмөт итеп тәрбиәләнем, һин минең донъянан күсеүемде өмөт итеп тәрбиәләйһең. Былай булғас, минең тәрбиә менән һинең тәрбиә нисек тигеҙ булһын?" - тигән.

Әсә кеше үҙе ас булған хәлдә лә, балаһын туйындырыр, йоҡларға яйы булмаған хәлдә, балаһын йоҡлатыр өсөн тырышыр, балаһының шатлығы менән шатланыр, ҡайғыһы менән ҡайғырыр. Бындай ҡатындарҙың һәр береһенә ун рәхмәт әйтеп, күңелдәрен йыуатыу - иң аҙ яҡшылыҡтыр. Әммә уларға ирҙәре, ирҙәренең туғандары тарафынан насар һүҙҙәр ҙә ишетелеп тороуы ихтимал. Бындай ҡатындарға балалары ғына күңел йыуанысы килтерер. Шуның өсөн дә ата һәм әсәләргә һәр ваҡыт мал һәм йылы һүҙ менән ярҙам итеү, хәлдәрен һорап тороу, һәр изге ғәмәленә доғаларын алырға тырышыу - Ислам шәриғәте тарафынан бойорола. Бала кем булып киткән хәлдә лә, был бурыстарҙан бер ҡасан да азат булмаҫ.

Балалар ата-әсәһенә мөхәббәт менән ҡараһа, хөрмәт итһә, үҙ балаларынан да хөрмәт күрерҙәр. Киреһенсә, уларҙы хөрмәтләүҙәрендә кәмселек булһа, был кәмселектәр бер нисә тапҡыр артығы менән үҙҙәренең балаларынан күрелер.

Ҡыҙ балаларҙың артыҡ хеҙмәттәргә, күп төрлө сығымдарға, диҡҡәтле тәрбиәләргә мохтаж булғанлығы шикһеҙ. Ир балалар ирҙәр ҡорона ингәс, берәй төрлө кәсеп һәм һөнәр менән ата һәм әсәләрен мәшәҡәттәрҙән бер аҙ булһа ла азат итер. Ләкин ҡыҙ балалар буй еткерә барған һайын ата һәм әсә ҡарауына мохтаж булыр. Улар иргә сыҡҡас та ата-әсәләренең хәтеренән сыҡмаҫ, улар гел ҡыҙҙарын ҡайғыртыр. Шул сәбәпле, ҡыҙ балалар ата-әсәһенең ҡәҙерен тағы ла нығыраҡ белергә, уларҙы сикһеҙ яратырға, хөрмәт күрһәтергә тейеш.

Ата-әсә был донъянан күсеп киткәндән һуң, һәр ваҡыт уларға хәйер-доға ҡылып, изгелек эшләп, яҡшы ғәмәлдәр башҡарып уларҙы шатландырыу - балаларҙың оло бурысылыр.

*АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ*

**Ошо көндәрҙә 85 йәшен тултырған был арҙаҡлы уҡытыусыны -Мәликә Ғибаҙулла ҡыҙы Йосопованы күптәр белә, уның дәрестәрендә күп башҡорт зыялыларының күңеленә туған телгә тәүге һөйөү орлоҡтары сәселгән. Ул РСФСР мәктәптәре отличнигы, РСФСР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы. Ул - өс бала әсәһе. Һәр бер балаһы үҙ эшендә дан ҡаҙанған, һәр балаһының хеҙмәте хөкүмәтебеҙ тарафынан "атҡаҙанған" тигән юғары исем менән баһаланған. Ринат Йосопов - атҡаҙанған фән эшмәкәре, Рәшиҙә - атҡаҙанған медицина хеҙмәткәре, Ришат - атҡаҙанған юрист. Оло юбилейы көндәрендә Мәликә Ғибаҙулла ҡыҙы менән бер аҙ әңгәмә ҡороп алдыҡ.**

# БАЛАЛАҒЫ КҮҢЕЛ БУШЛЫҒЫ...

## туған теленән мәхрүм итеүҙән ул



**➔ Мәликә Ғибаҙулла ҡыҙы, бала тәрбиәләүҙә башҡа әсәйҙәр менән уртаҡлашыр тәжрибәгеҙ күп, әлбиттә. Ә шулай ҙа балаларығыҙҙың һәр береһенең үҙ эшендә халыҡ абруйы яулауының, маҡтаулы хеҙмәткәр булып китеүенең төп сере никә?**

- Мин балаларымды бик яраттым. Әммә талапсанлыҡ аша булды был ратыу. Бәләкәйҙән һәр береһенең ҡулынан килгән эште генә ҡуша торғайныҡ атаһы менән. Тик шул эште аҙағына тиклем еткереп, тамамлап ҡуйыуҙары, мөмкин хәтлем яҡшы башҡарыуҙары төп шарт булды.

Баланы бер ваҡытта ла кәмһетергә, етешһеҙлеге менән сыбыртҡыларға ярамай. Мин үҙ балаларымдың да, уҡыусыларымдың да күңелен үҫтереү, ҡанатландырыу яғын ҡарай торғайным. Был да минең төп тәрбиә серҙәремдең береһе. Атайым Ғибаҙулла Йомағужин белем алыуға сарсап, бәләкәй генә Ҡужабәк ауылынан Ырымбурға, унан Бохараға сығып киткән. Унда мәҙрәсәлә шул тиклем яҡшы уҡыған, хатта уны белемен камиллаштырырға Һиндостанға ебәрәләр. Шунан указлы мулла булып ҡайтҡан. Уны халыҡ бик яратты. Ипле һүҙле, аҡыллы кәңәше менән бик күп кешеләргә ауыр ҡайғыларҙан, хатта сирҙәрҙән йолоп алып ҡалған, тиҙәр. Тимәк, халыҡтың "Яҡшы һүҙ йән аҙығы" тигәне дөп-дөрөҫ. Бик күп кешеләр яҡшы һүҙгә мохтаж була бит. Өсөнсө сер - яҡшы һүҙ. Ә инде ҡалған серҙәрҙең дүртенсеһе лә, йәҙәнсеһе лә үҙ балаң менән туған телдә аралашыу. Туған телдә быуындан-быуынға килгән рухи байлыҡты биреп була балаға. Халҡыбыҙҙың үткәнен, йырҙарын, бейеүҙәрен, сәсәнлек маһирлығын ят телдә ҡайһылайтып һеңдерер инем балаларым күңеленә? Туған телен белмәгән балаға ул кәрәкмәй ҙә. Туған теленән мәхрүм ителгән балала күңел бушлығы барлыҡҡа килә. Тәрбиәлә төп хата - балала күңел бушлығы барлыҡҡа килеүҙән башлана.

**➔ Ә бит туған телдә һөйләшкән балаларҙың да тура юлдан тайпылғандары була.**

- Уныһы инде балаң күңелен аңлай белмәүҙән, уны үҙенсә итергә тырышыуҙан, уның уй-хыялдары менән иҫәпләшмәүҙән башлана. Ринатым баш бала булды. Шул тиклем нескә күңелле, ипле ҡуллы, иғтибарлы булды. Ундай йөрәк менән иҫ китмәле врач булыр инде был, тип уйлай торғайным. Уйлау ғына түгел, мин уның врач булыуын теләнем дә. Ә ул бәләкәйҙән археология менән ҡыҙыҡһынды. Балалығы менән романтикаға ынтылалыр, һөнәр һайлауҙа яңылышып ҡуймаһа ярар ине, тип ҡурҡа инем. Шул уҡ ваҡытта күңелен яралап, рухын һындырып ҡуйыуҙан да һаҡландым. Унынсы класта уҡыған сағында икеләнеүҙәрем менән геолог Диҡҡәт Бураҡаев менән кәңәшләштем. Бөгөнгөләй хәтеремдә, беҙгә хәл белергә килгәйнеләр Мәрйәм менән. Ҡатыны Мәрйәм Бураҡаева - минең уҡыусым. Иҫәнголға, ҡайны-ҡәйнәһенә ҡунаҡҡа ҡайтҡан саҡтары ине. Ринат менән бик оҙаҡ һөйләшеп ултырҙы. Бер ваҡыт ҡояштай балҡып килеп сыҡты Ринатым бүлмәһенән. Медицина институтына уҡырға инергә, шул уҡ ваҡытта археологтар менән экспедицияға йөрөргә һәм әлегәсә республикабыҙҙа бөтөнләй булмаған белгес - антрополог булырға кәңәш иткән икән Диҡҡәт ағаһы. Шул тиклем яратты ул үҙ эшен. Халыҡ юлында булды. Башҡорттарҙың үткәнен генә өйрәнмәне, киләсәге менән дә йәшәне.

Рәшиҙә ҡыҙым - врач. Ул да күңеленә яҡҡан һөнәрен үҙе һайланы. Минең Рәшиҙәнең әсәһе икәнлегемде белеп ҡалһалар, ҡыҙымдың шул тиклем ярҙамсыл, итәғәтле булыуы, ваҡыты, ялы менән иҫәпләшмәй ярҙамға ашығыуы тураһында һөйләй башлайҙар, миңә рәхмәттәр әйтәләр. Ошо әсәйатай өсөн шатлыҡ түгелме!

Ришат улым Мәскәүҙә йәшәй. Башҡортостандың РФ Президенты ҡарамағындағы тулы хоҡуҡлы вәкәләтлегендә эшләй. Уның хаҡында ла маҡтау һүҙҙәре генә ишетәм.

Бала күңелен аңлау кәрәк. Баланың иң яҡын серҙәше булыуҙан да яҡшыһы юҡ. Мин уҡыусыларыма ҡарата ла иғтибарлы булырға тырыштым. Баланың шуҡлығын тәҙәлтеп булмаҫлыҡ тәртипһеҙлеккә һанап, юҡҡа сығара яҙған ҡайһы бер уҡытыусылар менән күп алышырға тура килде. Талантлар, ғәҙәттә, енмеш, үҙ һүҙле була. Уларҙың рухын һындырырға ярамай.

**➔ Тыуған районығыҙ Ейәнсура үҙәгендә тәүге башҡорт кластары асыуҙа ла һеҙ әүҙем ҡатнашҡанһығыҙ бит инде...**

- Эйе, 1950-1951 уҡыу йылында асылды башҡорт кластары Иҫәнголда. Тик бер һүҙгә иғтибар итегеҙ - асылманы ул, астырҙыҡ. Башланғыс кластарҙы Нурия Сәйетова, билдәле журналист Азамат Сәйетовтың әсәһе менән атаһы астыртыуға өлгәшкәйне, артабан мин йөрөнөм. Ҡыйыу ҙа булғанмын инде. Утыҙ йәш кенә булған үҙемә. Юғары белемем дә юҡ ине әле. Өс балам булғас ҡына БДУ-ны ситтән тороп тамамланым. Башҡорт кластары астыры мәсьәләһен күтәреп йөрөйөм. РОНО мөдире: "Бушҡа тырышаһығыҙ, Мәликә Ғибаҙулла ҡыҙы, юҡҡа көс әрәм итәһегеҙ. Киләсәге юҡ ул башҡортса уҡыуҙың", - ти. Шулай ҙа кластар асылды. Эшләп китте. Тик атай-әсәйҙәр туған телдең әһәмиәтен ул саҡта ла бик аңламаны, әле лә шул уҡ хәл ҡуҙәтелә. Башҡорт кластарында, башҡорт мәктәптәрендә уҡымаған хәлдә лә балаларың менән өйҙә һөйләш башҡортса, туған мәҙәниәт буйынса белемдә үҙең бир. Минең балаларыма ла башҡорт класында уҡырға тура килмәне. Йәнем әсей-әсей рус кластарына бирҙем балаларымды, әммә өйҙә башҡорт теленән, әҙәбиәттән, башҡорт тарихынан өҫтәмә һабаҡтар бирҙем. Даими шөғөлләндем. Ошо уңайҙан әйтеп китәйем, аҙаҡ мин Өфө ҡалаһының 20-се башҡорт мәктәбенә уҡытырға килдем. Уйлап-уйлап шундай һығымтаға киләм: ни тиклем ҙур эш башҡарғандар башҡорт зыялылары ошо мәктәпте астырып. Быны уйлап ҡарайыҡ: ошо мәктәп асылғанға тиклем тырым-тырағай рус кластарында уҡыған башҡорт балалары араһында бер генә шәхес тә юҡ.

**➔ Шәхес тип ниндәй кешене әйтәһегеҙ?**

- Мин шәхес тип юғары дәрәжәләргә генә өлгәшкән ғалимдарҙы әйтмәйем. Шәхес - ул үҙ халҡының улы булырға, үҙ халҡының ҡаҙанышын, ғилемен күтәреү аша кешелек донъяһы мәнфәғәтенә өлөш индерергә тейеш, тип уйлайым. Районыбыҙҙа бер уҡытыусы бар - Наил Яхъя улы Юлдашбаев. Была ул яһаған тикшеренеүҙәр, һығымталар дөп-дөрөҫ: районыбыҙҙан сыҡҡан зыялыларҙың бөтөнөһө лә заманында башҡорт мәктәптәрен тамамлаусылар. Телдән, мөхиттән, тарихтан, ижадыбыҙҙан айырылыу арҡаһында күпме талантарыбыҙ әрәм булалыр инде. Шулай тип уйлап йөрәк әрней. Бөгөнгө көндә ҡалала милләт бөҫөн күтәреүсе егеттәр һәм ҡыҙҙар 20-се мәктәпте тамамлаусылар бит. Ә быға баш ҡалабыҙҙа йәшәгән һәм эшләгән башҡорттарҙың балаларының бик-бик һирәктәре генә туған телен белеп, туған халҡы өсөн ниҙер эшләй. Туған телдең әһәмиәтен һаман аңлап етмәйҙәр. Миҫалдар күҙ алдында, тотоп ҡарамалы. Ә атай-әсәйҙәрҙең күбеһе аңлап бөтмәй. Быны Ринатымды ғына алайыҡ. Исеме киң таралған ғалим. Донъя ғилеменә тос өлөш индерерлек асыштар яһаны. Ә был асыштар бит иң элек туған халҡының булмышын, тарихын, үткәнен, киләсәген мөкиббән китеп яратыуҙан башланды. Был һөйөү уға бәләкәйҙән туған тел аша һалына барҙы.

**➔ Тимәк, тәрбиәләгә төп уңыш сере - ул туған тел?**

- Тәрбиәлә төп уңыш серенең тәүгеләре лә, йәҙәнсеһе лә - үҙ балаң менән туған телдә аралашыу, туған мөхиттән айырмау, халҡыңдың тотош рухи байлығын туған тел аша күңеленә һала барыу.

**Зилә БИКТИМЕРОВА**
**әңгәмәләште.**

ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ

# ТАРИХСЫ ТОЙҒОҒА БИРЕЛҺӘ...

## ныҒыраҡ яңылышыр, ти Тацит

**2009 йылда Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә танылған тарихсы, профессор Раил Кузеевтың "Историческая этнография башкирского народа" тигән китабы баҫылып сыҡҡайны. Тарихсылар, ғөмүмән, был фән менән ҡыҙыҡһыныусылар өсөн бик күп ҡиммәтле мәғлүмәттәрҙе үҙ эсенә алған был китапта, үкенескә ҡаршы, ышандырып етмәгән йәки бәхәсле мәғлүмәттәр ҙә юҡ түгел.**




Аҡыл эйәһе Тацит әйтмешләй, тарихсы "асыуһыҙ һәм тойғоһоҙ эш итергә" бурыслы, сөнки хискә бирелеү, һүҙ айырыуса милли тарих тураһында барғанда аңлашылмаусанлыҡҡа, хатта конфликтҡа килтереүе ихтимал. Күрәһең, мәрхүм профессор был хаҡта уйлап еткермәгәндер. Мәҫәлән, китаптың 250-се битендә ул башҡорт халҡының XVII - XVIII быуаттарҙа аҡрын артыуының төп сәбәбен "етештереү көстәренең түбәнлегенә ҡайтарып ҡалдыра. Йәнәһе, башҡорттар күсмә тормошта йәшәгәнлектән, уларҙың хужалығы климат шарттарына бәйле булып, ҡоролоҡтар, йот йылдары кешеләр һәм малдарҙың күпләп үлеүенә килтергән. Был, моғайын, авторҙың шәхси ҡарашылыр, сөнки фекерен раҫлап, автор бер генә факт та килтермәй.

"Етештереү көстәренең түбәнлеге"н тарихсы иҫбатламай һәм иҫбатлай ҙа алмай, сөнки ул дәүерҙәрҙә завод-фабрикалар булмаған, игенселек культураһы тураһында һүҙ ҡуйыртыу урынһыҙ - башҡорттар нигеҙҙә малсылыҡ менән көн иткән. Шул уҡ ваҡытта ошоғаса билдәле сығанаҡтарҙа башҡорттарҙың ул дәүерҙәрҙә фәҡир, аслы-туҡлы ғүмер һөрөүен раҫлаған факттар осрамай. Киреһенсә "Китап" нәшриәтендә 2007 йылда донъя күргән "Башкиры" тигән китапта (авторҙары - Р. Буканова һәм М. Фешкин) XVIII быуат урталарында йәшәгән П. Д. Аксаков башҡорт ерҙәренең иркенлеге, уңдырышлылығы тураһында яҙып ҡалдырған, тип иҫкә алына. Д. Никольский (XIX быуат) башҡорттар араһында хәйерселәр осрамауы хаҡында әйтһә, уның замандаштары В. Черемшанский менән В. Флоринский аҫабаларҙың сәләмәтлеге ныҡлығы һәм физик яҡтан сыныҡҡанлығы тураһында мәғлүмәт ҡалдырған. Башҡорттарҙың хужалығын фәҡирлеккә төшөргән сәбәпте 1905 йылда И. Сытин ширҡәте баҫтырып сығарған "Урал" тигән йыйынтыҡта күрәбеҙ. Башҡорт ерҙәрен талау арҡаһында ҡасандыр ирекле, бай, аҡыллы һәм ғорур башҡорт өркәк һәм йәл кешегә әүерелгән, тиелә унда. Тик был мәғлүмәт XVII - XVIII быуаттарға түгел, XIX быуатҡа ҡағыла. Дөрөҫ, Р. Кузеев демографик проблеманың икенсе сәбәбен - башҡорт ихтилалдарын да атай. Ләкин был икенсерәк планда ҡарала, тимәк, уның әһәмиәте лә аҙыраҡ, тигәнде аңлата. Мәҫәлән, автор Башҡортостан тарихында билдәле шәхес В. Татищевҡа һылтанып, 1735 - 1740 йылдарҙа 60 мең башҡорт үлтерелде, аҫлыҡтан үлде йәки таратып бирелде, тип яҙа. Арыраҡ быға шик белдереп, ҡорбандар иҫәбен 50 меңгә тиклем кәметә.

Китап авторы шулай уҡ башҡорттың милли уҙаңы тураһында ла фекер йөрөтөп, уның "тотороҡһоҙлоғо" хаҡында бер нисә тапҡыр әйтеп үтә. 259-сы биттә ул күсеп килгән халыҡтар менән аралашыу арҡаһында башҡорттарҙың милли уҙаңы емерелә башлай, тип яҙһа, 281-се биттә хатта "башҡорт" атамаһын "катлам" тип атауға саҡлы барып етә. Башҡорттар менән татарҙар бергә көн иткән ауылдарҙа башҡорттарҙың ерһеҙ ҡалыуы менән "башҡорт" этнонимы үҙенең әһәмиәтен юғалта, тигән фәжәйеп үҙенсәлекле, нигеҙһеҙ һәм ашыҡыс һығымта яһай ғалим. Ә бит милли уҙаңдың үҙгәреүен махсус эшләнгән методика нигеҙендә социологик тикшеренеү үткәреү иҫәбенә генә асыҡларға мөмкин икәнлеген, күрәһең, тарихсы иҫәпкә алмаған. Шул уҡ ваҡытта был осорҙа татар миссионерҙарының башҡорттарҙы ғына түгел, фин-угыр халыҡтарын да татарлаштырыу сәйәсәте алып барыуына батша хөкүмәте лә иғтибар итергә мәжбүр була һәм ошо хаҡта "О татаризации инородцев Приволжья" тигән китап та сығарып, уға ҡаршы көрәшеүҙе бурыс итеп ҡуя.

Китабының 275-се битендә профессор 1897 йылда үткәрелгән Бөтә Рәсәй халыҡтары иҫәбе мәғлүмәттәренә, дөрөҫөрәге, башҡорттарҙың иҫәбе 1,3 миллионға етеүенә лә шик белдерә. Уның фекеренсә, башҡорттар иҫәбенә мишәр менән типтәрҙәр ҙә индерелгән, имеш. 1871 йылда нәшер ителгән Хәрби-статистик йыйынтыҡта башҡорттарҙың 1, 076 миллион итеп теркәлеүен дә тарихсы шик аҫтына ала.

Артабан Р. Кузеев Бөрө, Бәләбәй, Өфө өйәҙҙәрендә борондан татар, типтәр һәм мишәрҙәр күпләп йәшәгән төбәк (267-се бит) тигән фекер үткәрә. Шуға күрә лә ул "башлыса татарҙар тупланып йәшәгән Минзәлә өйәҙе Татар АССР-ына китә", тигән һығымта яһап ҡуя. Ләкин был ҡараш ысынбарлыҡҡа ҡаршы килә. Мәҫәлән, 1897 йылғы иҫәп буйынса өйәҙҙә башҡорттар менән урыҫтар 123-әр мең (32-шәр процент), йәғни бөтә халыҡтың өстән ике өлөшөн тәшкил иткән. Татарҙар иһә 107 меңдән артмай, тимәк, ғалимдың һығымтаһы факттан бигерәк тойғоға ҡоролған. Ғалим был осраҡта типтәрҙәрҙе күҙ уңында тота икән, улар ҙа 14 меңдән саҡ ҡына күберәк. Ә бына уларҙың араһында ла татарҙарҙың 40 процент самаһы ғына булыуын да автор, күрәһең, танырға теләмәй. Шулай булмаһа, 270-се биттә ул типтәрҙәрҙе башлыса татар этнографик төркөмдәренән торған, тигән нигеҙһеҙ һығымта яһамаҫ ине.

Профессорҙың ошондайыраҡ бәхәсле һығымталарына ниндәйҙер дәрәжәлә битарафлыҡ күрһәтергә лә мөмкин булыр ине. Ә бына 284-се биттәге "1918 - 1919 йылдарҙа аҡ гвардиясылар һәм милләтселәр тарафынан таланған, емерелгән 7 мең крәҫтиән хужалығы, юҡҡа сыҡҡан 650 ауыл" тураһындағы фекеренә һис кенә лә битараф ҡалып булмай. Был фекерҙең большевистик пропаганда булыуы күптән башҡорт тарихсылары тарафынан иҫбат ителде. Ошо уҡ биттә, түбәндәрәк, профессор милләтселәрҙең вәлидовсылар булыуын атап әйтә. Имеш, башҡорт ауылдарын башҡорт милләтселәре талаған. Ә бит талаусыларҙың ҡыҙыл гвардиясылар икәнлеген Ә. Вәлидиҙең "Хәтирәләр"е һәм 2001 йылда "Китап" нәшриәтендә донъя күргән "А. Валидов - организатор автономии Башкортостана. У истоков федерализма" тигән китаптар документтар менән нигеҙләп раҫлай. Ә. Вәлидиҙең һәм Үҫәргән кантоны рәйесенең 1-се Ҡыҙыл армия командиры Гайға телеграммалары - тап ошо хаҡта. Ҡыҙылдар килтергән зыян, әхләҡи яғын иҫәпләмәгәндә, 2 миллион һумға еткән.

Китапҡа баш һүҙҙе академик Нияз Мәжитов яҙған. Күрәһең, ул китаптың йөкмәткеһе менән тулыһынса таныша алмаған. Танышҡан булһа, әлбиттә, аңлатма биреп үтер ине. Киләсәктә күптәр ҡулланасаҡ был хеҙмәттә ошондай хаталар булыуы башҡорт тарихи фәнен биҙәмәй. Ни генә тимә, Р. Кузеевтың исеме башҡорт тарихи фәнендә иң абруйлыһы һанала. Әлбиттә, мин тарихсының фәнгә өлөшөн кәмһетеп күрһәтергә йыйынмайым, сөнки дүрт аяҡлы ат та абына. Уның 80-се йылдар аҙағында, башҡорттар милләт булып өлгөрмәгән, тигән сәйер ҡарашы ул саҡта башҡорт йәмәғәтселегендә шау-шыу тыуҙырғайны. Ошо урында Ризаитдин Фәхретдиновтың, һәр халыҡ үҙ тарихын үҙе яҙырға бурыслы, тигән тәрән аҡылының тапҡырлығына тағы бер ышанаһың. Дөрөҫ, был йәһәттән башҡорт тарихи фәне һуңғы йылдарҙа ҙур ҡаҙаныштарға өлгәште. Советтар осорондағы халыҡтан йәшерелгән йәки объектив баһа бирелмәгән факттар тәҙәтелеп, йәмәғәтселек иғтибарына тәҡдим ителде. Күрәһең, мәрхүм профессорҙың әлеге ҡараштарына һунланҡырап була ла объектив баһа биреү мотлаҡ.

**Мәхмүт ХУЖИН.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ



# ЫСЫН САБЫРЛЫҠ

**Шундай хәҙис бар. Бер ваҡыт Аллаһ Илсеһе (с.ғ.с.) ҡәбер янында күҙ йәштәрен түгеп ултырған ҡатын янынан үтеп барған. Ҡатындың хәлен күреп уға:**
**-Аллаһтан ҡурҡ һәм сабыр ит! - тигән.**
**Бәйғәмбәрҙе танымайынса, ҡатын:**
**-Кит янымдан, мин кисергәнде һинең кисергәнең юҡ бит әле! - тип ҡысҡырып ебәргән.**
**Әңгәмәсенең Бәйғәмбәр булғанын әйткәстәр генә ҡатын Аллаһ Илсеһе артынан тороп йүгерә һәм:**
**-Мин Һеҙҙе танымаһым! - тип ғәфү үтенә.**
**-Ысын сабырлыҡ тәүге тетрәнеүҙә! - тип яуап бирә Бәйғәмбәр.**

Хәҙистә телгә алынған ҡатындың исеме билдәле түгел, әммә риүәйәттәрҙән аңлашылыуынса, ул үҙ балаһының ҡәбере янында илай. Алдында Бәйғәмбәр торғанын белмәгәнгә ул уға тауыш күтәрә. Әлбиттә, бер мосолман да эргәһендә Бәйғәмбәр булғанын күрә тороп, уға ундай һүҙҙәр әйтмәҫ ине. Ҡатындың ҡысҡырыуына Аллаһ Илсеһе бер ни ҙә өндәшмәй, үҙ юлында була: йәнә һүҙ ҡуша, яуап тағы ла тупаҫыраҡ яңғырар, ә ҡатын үҙе унан да ауыр, хәүефле хәлгә ҡалыр ине.

Сәхәбәләрҙең береһе, ҡатындың аңһыҙ хата ҡылыуын күреп, унан һорай: "Һине түҙемлеккә һәм Хоҙайҙан ҡурҡырға саҡырған кешенең кем икәнен беләһеңме?" "Юҡ", - тип яуап бирә ҡатын һәм эргәһендә Аллаһ Илсеһе булғанын белеп, уның артынан ғәфү үтенергә ашыға. Бәйғәмбәр нәсихәт итеп ҡатынға ысын сабырлыҡтың нимә икәнен аңлата. Сабырлыҡ - тәүге тетрәнеүҙә, тигәнен шулай аңларға кәрәк: ҡайғының тәүге минуттарынан уҡ түҙемлеккә эйә булыу.

Кешенең күпте кисереүе һәм барыһына ла күнегеүе билдәле. Ләкин иң ҡыйыны - тәүге һынауҙы, беренсе һыҙланыу тойғоһон кисереү, сөнки һыҙланыу ваҡыт үтеү менән генә баҫыла һәм үҙенә күнектерә. Кешенең ҡайғы менән һынауға әҙер булмауы тағы ла ҙурыраҡ фажиғәгә, зиһене томанланыуына йәки үҙ-үҙенә ҡул һалыуға килтереүе ихтимал.

Үлем менән йөҙгә-йөҙ осрашҡанда - сабырлыҡтың иң кәрәкле сағы, шул ваҡытта мосолмандың ысын иманы күренә. Кешеләрҙең яҡындарын юғалтҡанда һыҡтау, ҡысҡырыу, илауҙары бер кемгә файҙа килтермәй. Бындай ҡайғылы мәлдәрҙә булғанды ҡабул итеп кенә ҡотолоу юлын табырға мөмкин. Киреосраҡта кешегә хәүеф янай, сөнки тыйылған һүҙҙәр әйтеп, ул Бәйғәмбәргә, хатта Аллаһҡа ҡаршы сығыуы бар. Кеше ихтыярын юғалтҡанда әйткән һүҙҙәренә, ҡылған эштәренә яуап бирерлек түгел. Ысын мосолман, яҡындары фажиғәгә тарығанда, "Иннә лилләһи үә иннә иләйһи раджиун"(Беҙ Аллаһтыҡы, һәм Уға ҡайтабыҙ) тигән һүҙҙәрҙе телгә алып, үҙен тотанаҡлы тоторға тейеш.

**Хәҙистән һабаҡтар:**
- Яҡшылыҡҡа өндәгәндә, ҡаршылыҡтарға һәм ризаһыҙлыҡҡа әҙер булырға кәрәк.
- Ҡәбергә килеү рөхсәт ителгән, ә ҡәбер өҫтөндә үлгән кеше өсөн янып көйөү, өҙгөләнеүҙе динебеҙ тыя.

✓ *Социаль селтәр танышыу, аралашыу өсөн иң ҡулайлы юлдарҙың береһе. Шулай уҡ унда үҙең теләгән әйберҙе рекламаларға була, социаль селтәр һинең тауарыңды һатып алырға әҙер булған ҙур төркөм кешеләрҙән тора.*





# ИНТЕРНЕТТАН

## әммә уны үҙ файҙабыҙға

**Һуңғы йылдарҙа интернет тормошобоҙға ярайһы уҡ ныҡлап үтеп инеп, заман кешеһенең тормошонда төп инструменттарҙың береһенә әүерелде. Яңылыҡ ресурстары, төрлө социаль селтәрҙәр, видео һәм аудио хостингтар мәғлүмәт тупларға ғына түгел, ә аралашыу мөмкинлеге лә бирә, шуға ла бөгөн интернет йәштәрҙе генә түгел, балаларҙы һәм ололарҙы ла үҙенә күпләп йәлеп итә. Ошо шарттарҙа беҙ үҙебеҙҙең асылыбыҙҙы, милли булмышыбыҙҙы нисек һаҡлап ҡалырға тейешбеҙ? Интернет эсендәге башҡорт донъяһы ниндәй булырға тейеш? Ошо һәм башҡа һорауҙарға яуапты Башҡортостан Республикаһының Милли әҙәби музейы хеҙмәткәре Радмил АБДРАХМАНОВ, "БашАрт" башҡорт ижади берекмәһе директоры Заһир ИШКИНИН һәм AdSense-эшҡыуар Илнур ЙОСОПОВ менән эҙләйәсәкбеҙ.**

▶ **Интернет һеҙҙең тормош-көнкүрешегеҙҙә, эшегеҙҙә, яҙмышығыҙҙа ниндәй роль уйнай? Интернетты ниндәй маҡсаттарҙа ҡулланаһығыҙ, ул һеҙҙең күпме ваҡытығыҙҙы ала?**

**Илнур ЙОСОПОВ:** Интернет минең өсөн аҡса эшләргә мөмкинлек биргән төп сара булып тора. Йәғни, мин әлеге мәлдә ниндәйҙер килем алам икән, ул тулыһынса интернет ярҙамында атҡарыла. Интернет ҡулланып килем алыу - ул минең өсөн аҡса эшләүҙең иң еңел ысулы. Мин Башҡортостандың ниндәйҙер ауылында йәки Африка континентында йәшәй алам, был минең өсөн аҡса эшләүгә кәртә булып тора алмай, бары тик интернет ҡына булһын.

AdSense-бизнес - ул интернет-бизнестың иң ябай төрө иҫәпләнә. Был эштә үҙеңә ниндәйҙер тауар етештерергә йәки башҡалар етештергән тауарҙы һатырға кәрәкмәй. Минең төп бурысым - сайт эшләп, уны популяр итеү, танытыу. Интернетта был бизнес тулыһынса автоматлаштырылған булғанлыҡтан, был сайтҡа автоматик рәүештә тематик реклама ҡуйыла. Мәҫәлән, сайт машиналар тураһында икән, ундағы иғландар ҙа машиналарға ҡағылышлы булырға тейеш. Әйтәйек, Opel автомашиналарын һатыу буйынса. Һеҙҙең сайтығыҙға инеп, ундағы мәғлүмәт менән танышыусылар был рекламаны күргәс, уға баҫып, рекламаланған сайтты ла инеп ҡарай. Ошондай һәр кеше өсөн һеҙҙең иҫәпкә комиссион аҡсалар күсә. Был эштә реклама биреүсене эҙләргә лә кәрәкмәй, йәғни, был эшмәкәрлек интернетта тулыһынса автоматлаштырылған. Мин бер нәмә лә эшләмәйенсә, аҡса эшләйем, тип әйтергә була.

Быңдай юл менән аҡса эшләү сит илдәрҙә, әйтәйек, Америкала киң таралған, ә беҙҙең илдә уларҙың иҫәбе 1 процент тирәһе. Быны төрлө сәбәптәр менән, иң тәүҙә, интернеттың яңы үҫешә башлауы, халыҡтың күпселек өлөшө ауылдарҙа йәшәүе менән аңлатырға була.

**Заһир ИШКИНИН:** Минең тормошомда ла әлеге ваҡытта интернет ярайһы ғына мөһим урынды биләй, тип әйтә алам. Иң тәүҙә, интернет - ул аралашыу, алыҫ араларҙы яҡынайтыу, дуҫтар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе һыуындырмау, фекерҙәштәр табыу сараһы. Унан тыш, ул килем дә килтерә. Илнур кеүек эшмәкәрлегебеҙ тулыһынса интернетҡа ҡоролмаһа ла, беҙҙең ижади берекмә етештергән футболкаларҙы интернет-магазин аша таратабыҙ.

Ғөмүмән, интернет менән мауығыуым мәктәптә уҡыған йылдарҙа башланды. Ул саҡта әле интернет киңлектәре әлеге кеүек үҫешмәгәйне һәм ул ҡайһы бер урындарҙа, мәҫәлән, дәүләт учреждениеларында ғына бар ине. Атайымдың эшенә барып, интернетта ултыра торғайным, ул ваҡытта яңы ғына яндекс барлыҡҡа килгәйне, чаттар бик популяр ине. Чаттарҙа аралашыуҙың мауыҡтырғыс яғы - унда бер кем дә һине күрмәй, күп осраҡта йөҙгә танымай, нисә йәш икәнен белмәй, барыһы ла бер кимәлдә аралаша. Ул ваҡыт менән сағыштырғанда, хәҙер интернет үтә күренмәле, асыҡҡа әүерелде, унда бер кем дә бер нәмәне лә йәшермәй. Мәҫәлән, әгәр ҙә кемгәлер Заһир Ишкининды табырға кәрәк булһа, ул уны мотлаҡ табасаҡ. Тик бында һайлау мөмкинлеге бар, кем теләмәй, улар үҙҙәрен йәшерә ала, үҙе тураһында һайланма ғына йәки бөтөнләй мәғлүмәт ҡалдырмай.

**Радмил АБДРАХМАНОВ:** Илнур менән Заһирҙан айырмалы рәүештә, мин был мәсьәләлә үтә "мода"лы түгел, сөнки интернетты мәғлүмәт алыу, үҙемә кәрәкле мәғлүмәтте эҙләп табыу өсөн генә файҙаланам. Шулай уҡ интернет биргән ҡайһы бер хеҙмәттәр менән ҡулланам, мәҫәлән, электрон почта аша хат ебәрәм. Интернет минең өсөн ярҙамсыл функцияға ғына эйә. Әгәр ҙә ул булмаһа, мин шул уҡ хатты почта аша ла ебәрә, йәки кәрәкле адресатҡа үҙем алып барып тапшыра алыр инем. Әлбиттә, йәшермәйем, интернет аша тиҙерәк һәм уңайлыраҡ килеп сыға, ваҡытың да әҙерәк китә - был йәһәттән уның ыңғай яғы баһалап бөткөһөҙ.

▶ **Мәғлүмәт технологиялары өлкәһендә яңы тармаҡтар барлыҡҡа килеп тора. Бөгөн Рәсәйҙә "Класташтар" ("Одноклассники"), "Бәйләнештә" ("В контакте") кеүек социаль селтәрҙәр киң популярлыҡ менән ҡулланыла. Был социаль селтәрҙәрҙә нимә эшләргә була? Кешегә, бигерәк тә йәштәргә улар нимә бирә? Ни өсөн улар көндән-көн күберәк кешене йәлеп итә?**

**Заһир ИШКИНИН:** Мәктәп уҡыусылары, студенттар өсөн ул тәүҙә аралашыу сараһы. Социаль сайттар кешеләрҙе яҡынайта ала һәм унда барған аралашыу шул тиклем ябай булыуы менән йәлеп итә. Шул уҡ ваҡытта виртуаль аралашыуҙа артыҡ яуаплылыҡ та юҡ кеүек.

**Илнур ЙОСОПОВ:** Ысынлап та, социаль селтәр танышыу, аралашыу өсөн иң ҡулайлы юлдарҙың береһе. Шулай уҡ унда үҙең теләгән әйберҙе түләүле һәм түләүһеҙ рекламаларға була, социаль селтәр һинең тауарыңды һатып алырға йәки һинең тәҡдимеңде тыңларға әҙер булған ҙур төркөм кешеләрҙән тора. Мин, элек нисек концерттарға халыҡты йыйғандар икән, тип аптырайым, хәҙер афиша йәбештерергә кәрәкмәй, интернет аша мәғлүмәтте тиҙ таратыу мөмкинлеге бар. Социаль селтәрҙәрҙең бер ҙур минусы - һинең көнө буйы унда бер нәмә лә эшләмәйенсә ултырыуың ихтимал. Әйткәндәй, социаль селтәрҙәр менән ҡулланыусыларҙың күпселек өлөшө шулай итә лә инде. Йәғни, уның менән дөрөҫ ҡулланһаң, аҡса эшләргә була, музыка ғына тыңлап, мәғлүмәттәр генә уҡып ултырһаң, ваҡытыңды бушҡа үткәрәһең.

**Радмил АБДРАХМАНОВ:** Социаль селтәрҙәр аша сәйәси революциялар яһарға була икәнлеген Яҡын Көнсығыштағы низағтар күрһәтте инде, тимәк, интернет йәмғиәттең сәйәси тормошонда ла һуңғы ролде үтәмәй.

**Заһир ИШКИНИН:** Бының менән килешергә лә, кире ҡағырға ла була, сөнки һәр мәғлүмәтте ҡабул итеүгә иң тәүҙә халыҡтың әҙер булыуы шарт. Кеше ниндәйҙер эшмәкәрлекте башҡарырға әҙер, тик уны нисек эшләргә генә белмәй, бына был осраҡта уларға йүнәлеш биреп ебәреү йәһәтенән социаль селтәрҙең көсө күренәсәк. Мәҫәлән, һинең мөрәжәғәтеңә һинең тауарыңды һатып алырға әҙер булған кеше генә яуап бирәсәк. Кем теләмәй, унан көсләп футболка һатып алдырып булмай. Шулай уҡ 10 мең кешегә бер мәғлүмәтте бирәһең, шуның туҡһан туғыҙы ғына мәғлүмәтте ҡабул итә һәм тауар һатып ала, концертҡа, пикетҡа килә. Яҡын Көнсығыштағы хәрәкәткә килгәндә, унда кешеләр ниндәйҙер массалы күтәрелешкә әҙер булған, тик быны нисек эшләргә генә белмәгән, шунда ярҙамға социаль селтәр килгән.

Социаль селтәрҙәрҙе реклама маҡсатында ҡулланып була, тик бында ла күпселеккә ҡыҙыҡ булған төркөмдәр генә үҙ сафына күпләп кешене йыя аласаҡ. Мәҫәлән, экстремистик фашистар төркөмө йөҙ мең кешене бер ҡасан да туплай алмаясаҡ, сөнки күптәр быны теләмәй, ә айподтарҙы яратыусылар төркөмө күпкә күберәк кешене йәлеп итеүе ихтимал. Шулай итеп, интернет, социаль селтәрҙәр ниндәйҙер эштәрҙе башҡарырға, иң мөһиме, сифатлы итеп башҡарырға ярҙам итә.

**Радмил АБДРАХМАНОВ:** Йәмғиәттә социаль селтәрҙәргә мода ла бар бит әле. "Ни эшләп һин "Бәйләнештә" юҡ?" тигән һорауҙарҙың йыш яңғырауын иҫәпкә алғанда, социаль селтәрҙә аралашыу унда аралашмауға ҡарағанда күберәк аптырау тыуҙыра, күрәһең.

Социаль селтәрҙәргә ҡарашым ыңғай түгел, минең өсөн унда бер ҡыҙыҡ нәмә лә юҡ. Элегерәк дуҫтарҙың әйҙәүе буйынса "Класташтар", "Бәйләнештә" социаль селтәрҙәрендә үҙемдең персональ битем бар ине, ҡыҙығы бөткәс, ваҡытты ла алғас, юйып ташланым. Бөгөн мине борсоған һорауҙар икенсе яҫылыҡта, тормошта бөтөнләй икенсе ҡиммәттәргә өҫтөнлөк бирәм. Шулай ҙа интернетты тулыһынса инҡар итеп булмай, уны дөрөҫ ҡулланырға өйрәнергә генә була.

*Минеңсә, тәрбиә мәсьәләһендә айырыуса бер нәмә лә үҙгәрмәгән. Бынан ун, егерме йыл элек беҙҙең атай-әсәйҙәр беҙҙе нисек тәрбиәләгән, әле лә ата-әсәләр балаларын шул рәүешле тәрбиәләй. Ә интернет ул, әйтәйек, радио, телевидение кеүек, кешелек үҫешенең бер этабы ғына. Элек бала тәрбиәһенә ғаиләнән тыш, балалар баҡсаһы, мәктәп үҙ өлөшөн индерһә, бөгөн был исемлеккә интернет өҫтәлде. Бынан һис тә ҡурҡырға кәрәкмәй.*

▶ **Интернет хәҙер бөтә ерҙә - мәктәптә лә, юғары уҡыу йорттарында ла, төпкөл ауылдарҙа ла бар. Уның йоғонтоһона бигерәк тә балалар тиҙерәк бирелә. Кешелек уйлап сығарған тәбиғи аралашыу сараларынан баш тартып, виртуаль тормошта йәшәгән балаларҙың шәхес булараҡ формалашыуына интернет ниндәй йоғонто яһай? Йәш баланың психикаһына интернеттың кире тәьҫире күберәк түгелме икән?**

**Заһир ИШКИНИН:** Минеңсә, тәрбиә мәсьәләһендә айырыуса бер нәмә лә үҙгәрмәгән. Бынан ун, егерме йыл элек беҙҙең атай-әсәйҙәр беҙҙе нисек тәрбиәләгән, әле лә ата-әсәләр балаларын шул рәүешле тәрбиәләй. Ә интернет ул, әйтәйек, радио, телевидение кеүек, кешелек үҫешенең бер этабы ғына. Элек бала тәрбиәһенә ғаиләнән тыш, балалар баҡсаһы, мәктәп үҙ өлөшөн индерһә, бөгөн был исемлеккә интернет өҫтәлде. Бынан һис тә ҡурҡырға кәрәкмәй. Бары тик атай менән әсәй интернетты дөрөҫ ҡулланырға өйрәтеп, унан һин үҙеңә файҙалы нәмәне генә алырға тейешһең, тип әйтеп ҡуйырға тейеш.

**Радмил АБДРАХМАНОВ:** Мин был күренештең хәүефле яҡтарын күберәк күрәм, сөнки бөгөн ата-әсә ғаиләһен аҫырау өсөн күберәк аҡса эшләү менән генә мәшғүл. Улар көн кисләгәнсе эштә була, ә бала көндәр буйына интернеттан сығышмай. Тәрбиәне интернетҡа тапшырып ҡуйғас, йәштәр араһында әхлаҡһыҙлыҡ, көс ҡулланыу, ҡанһыҙлыҡ ҡайҙан килеп сыға икән, тип аптырарға түгел. Беҙ, ярай, икенсерәк заманда тәрбиә алғанбыҙ, интернет менән ҡулланабыҙ, әммә унда йәшәмәйбеҙ. Ә бөгөнгө бала виртуаль тормошта, бөтөнләй икенсе ҡиммәттәр хөкөм һөргән донъяла йәшәй, шунан сыға ла алмай. Уның был тормошҡа яраҡлаша алмауы, үҙен-үҙе таба алмауы ҡурҡынысын да онtorорға ярамай.

**Илнур ЙОСОПОВ:** Интернеттан һәр мәғлүмәтте ирекле рәүештә алып булғанлыҡтан, унда һәр һорауға яуап алып була, һөҙөмтәлә бала тиҙерәк өлгөрә, төрлө яҡлап үҫешеп, донъяға ҡарашы ла киңерәк була ала. Был интернеттың ыңғай яғы. Кире яҡтарына килгәндә, бала үҙенә тәғәйенләнмәгән, психикаһына насар йоғонто яһай торған мәғлүмәттәр менән дә иркен ҡуллана ала. Тимәк, барыбер ата-әсәнең контроле кәрәк бында.

**Заһир ИШКИНИН:** Әгәр ҙә ата-әсә аңлатып ҡына балаһын интернет менән артыҡ мауығыуҙан тыя алмай икән, кәрәкмәгән контентты алып ташлау өсөн фильтрҙар бар. Ололар балаһы өсөн ҡурҡа икән, әйҙә, шуларҙы ҡулланһын. Шулай ҙа балаға нимә насар, нимә яҡшы икәнен ата-әсә ул бәләкәй саҡта уҡ өйрәтергә тейеш.

**Радмил АБДРАХМАНОВ:** Тик үҙе икенсерәк ҡиммәттәр өҫтөнлөк алған осорҙа тәрбиәләнгәс, ата-әсәнең интернеттың зыяны тураһында уйлап ҡарамауы ла ихтимал. Икенсенән,

***✓ Нимә генә тимә, интернет әлегә беҙҙең өсөн ысынлап та ят һәм сит донъя, һәм уның эҙемтәләрен алдан баһалауы ауыр. Тарихта ла әлегә быға өлгө итеп итеп килтерерлек миҫал юҡ.***

# ҺАҠЛАНА АЛМАҪБЫҘ,

## ҡуллана алабыҙ…



баланың күпме ваҡытын интернетҡа бүлеүе лә мөһим. Ул унда китап уҡый, сана шыуа, атаһы, әсәһе, бәләкәй туғандары менән аралаша торған ваҡытын да сарыф итә бит. Һөҙөмтәлә, рухи ғына түгел, физик зыян да ала. Ошо балаларҙың үҫеп етеп, үҙҙәре ата-әсә булғас, бала тәрбиәләүҙе бөтөнләй интернетҡа тапшырып ҡуймаҫына ла ышаныс юҡ. Тик бында шуны аңлау кәрәк: зыянлы, тип, интернетты тормошобоҙҙан алып ташлай алмаясаҡбыҙ. Заһир дөрөҫ әйтә, тимәк, беҙгә уның менән дөрөҫ, үҙ файҙабыҙға ҡулланып өйрәнергә кәрәк.

**Илнур ЙОСОПОВ:** Минеңсә, берәй ун йылдан офлайн, йәғни, интернетһыҙ тормош өҫтөнлөклө һаналасаҡ, сөнки барыһын да интернет та, социаль селтәрҙәр ҙә ялҡытасаҡ. Бөгөн интернетта "ултырыу" модала булһа, тиҙҙән спорт менән шөғөлләнеү, сәләмәт тормош алып барыу модаға инәсәк. Кеше һәр ваҡыт башҡаларҙан айырылып торорға теләй. Интернет селтәрҙәре ни тиклем күберәк халыҡты йотҡан һайын, уларҙан айырылырға теләгән кеше офлайн тормошто һайлаясаҡ - был тормош ҡануны.

**► Бөгөн йәмғиәт тормошоноң бөтөн өлкәләрендә лә глобализация осоро кисерелә, был процеста, һис шикһеҙ, интернет та ҙур роль уйнай. Был селтәрҙә милләтебеҙҙе, телебеҙҙе, асылыбыҙҙы юғалтыу ҡурҡынысы янамаймы?**

**Заһир ИШКИНИН:** Мин, киреһенсә, интернетты милләтте, телде, мәҙәниәтте һаҡлап ҡала торған бер мөхит тип уйлайым, сөнки интернетта мәғлүмәт күпкә оҙағыраҡ һаҡлана. Әйтәйек, унда башҡорт йырҙарын, әҙәбиәтен, башҡорт милли кейемдәренең фотоларын һалырға була, тимәк, был юл менән виртуаль формала булһа ла халыҡ үҙен һаҡлап ҡаласаҡ. Яйлап башҡорт сайттары ла барлыҡҡа килә башланы, тиҙҙән улар тағы ла үҫешәсәк. Әлбиттә, интернетта универсаль тел ҡулланыла, унда бер кем дә һинең милләтеңде һорап тормай, йәғни, дөйөмләштереү барлыҡҡа килә. Әммә шул уҡ ваҡытта инглиз, рус телле интернет булған кеүек, башҡорт телле интернет та бар. Глобализация менән бер рәттән, локализация процесы ла бара. Интернет хәҙер ҙур майҙандарҙы баҫып алды, хәҙер локаль, мәҫәлән, айырым дәүләттәр өсөн мәғлүмәт системалары барлыҡҡа килә. Унда мотлаҡ рәүештә илдең урынлашҡан урыны, теленең төҙөлөшө, уның диалекттары иҫәпкә алына. Башҡортостандың да эске интернеты, башнет үҫешә башланы, тик Рәсәй интернеты әле башланғыс осорон кисергән мәлдә башҡорт интернеты үҫеше тураһында һүҙ йөрөтөүе ауырыраҡ.

**Радмил АБДРАХМАНОВ:** Нимә генә тимә, интернет әлегә беҙҙең өсөн ысынлап та ят һәм сит донъя, һәм уның эҙемтәләрен алдан баһалауы ауыр. Тарихта ла әлегә быға өлгө итеп итеп килтерерлек миҫал юҡ. Тормошта кеше интернетһыҙ ҙа йәшәй ала. Шулай ҙа башҡортса интернет булһа, яҡшыраҡ. Мәҫәлән, минең өсөн Башҡортостан, башҡорттар тураһында башҡорт телендә уҡыуы уңайлыраҡ булыр ине.

**Илнур ЙОСОПОВ:** Минең уйлауымса, нисек кенә үкенесле булмаһын, интернет дөйөм глобалләшеүгә килтерәсәк һәм халыҡтар өсөн бер генә аралашыу теле ҡаласаҡ. Был бәләкәй милләттәргә ҙур зыян килтерәсәге көн кеүек асыҡ. Әле үк күп сленгтар инглиз телендә яңғырай, киләсәктә улар тағы ла күбәйәсәк. Рус әҙәбиәте тарихына күҙ һалһаҡ, А. Пушкиндың тел реформаһын да йәмғиәт баштаҙур хәүеф менән ҡабул иткән, әммә аҙаҡтан өйрәнеп киткән бит. Шуға ла интернеттағы "дөйөм" тел ғәҙәти күренешкә әүереләсәк.

***Берәй ун йылдан офлайн, йәғни, интернетһыҙ тормош өҫтөнлөклө һаналасаҡ, сөнки барыһын да интернет та, социаль селтәрҙәр ҙә ялҡытасаҡ. Бөгөн интернетта "ултырыу" модала булһа, тиҙҙән спорт менән шөғөлләнеү, сәләмәт тормош алып барыу модаға инәсәк. Кеше һәр ваҡыт башҡаларҙан айырылып торорға теләй. Интернет селтәрҙәре ни тиклем күберәк халыҡты йотҡан һайын, уларҙан айырылырға теләгән кеше офлайн тормошто һайлаясаҡ - был тормош ҡануны.***

**Радмил АБДРАХМАНОВ:** Интернетта, тормошта башҡорт теле ҡулланылһын өсөн ул телдә аралашыу модала булырға тейеш. Әммә бөгөнгө көндә башҡорт теле формаль тел булып ҡала бирә. Ҡала мәктәптәрендә лә ул формаль рәүештә уҡытыла, ойошмаларҙа документтар башҡорт телендә алып барылмай. Беҙҙең милләт тарихында бындай тәжрибә бар, мәҫәлән, үткән быуаттың егерменсе йылдарында урындағы халыҡтың һөйләшендә документтар алып барылған. Әле бар рәсми ҡағыҙҙарҙы рус телендә тултырабыҙ, шулай уңайлыраҡ та тойола. Әммә дәүләт теле иҫәпләнгән телдең шундай уҡ хоҡуҡтары барлығын бер кем дә инҡар итә алмай. Тимәк, мәғлүмәт сығанаҡтары яйлап интернетҡа күсә икән, ундағы эшмәкәрлек дәүләт телдәре тураһындағы закон сиктәрендә барырға тейеш.

**Заһир ИШКИНИН:** Күп рәсми сайттар, ҡала хакимиәте, республика хөкүмәте сайттары ошо законға ярашлы, ике телдә алып барыла ла инде. Ҡулланыусылар күрәлер, был сайттарҙың башҡортса өлөшө исем өсөн генә эшләнә кеүек. Әммә һуңғы ваҡытта был йәһәттән ыңғай яҡҡа үҙгәрештәр ҙә бар. Электрон хөкүмәт булдырыуҙан алып, милли телдәге сайттар сығарыу тураһында һөйләшеүҙәр алып барыла, ниндәйҙер эштәр эшләнә.

**► Виртуаль тормош бик мауыҡтырғыс һәм кеше унда ысынбарлыҡ тойғоһон юғалтып, уның органик өлөшөнә әүерелеп китеүе ихтимал. Был бигерәк тә аҙ һанлы халыҡтар өсөн хәүефле. Ошо хәл килеп сыҡмаһын өсөн беҙ бөгөн йәштәребеҙгә интернет эсендә башҡорт донъяһын булдырырға тейешбеҙ. Башҡорт интернеты ниндәй булырға тейеш, һеҙ уны нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ?**

**Заһир ИШКИНИН:** Киләсәктә башҡорт интернетын үҫтереү өсөн теләктән тыш, ҙур ресурстар кәрәк. Баҙар шарттарында финанс ярҙам да булырға тейеш. Әммә уны дәүләт кимәлендә генә күтәрергә ярамай, сөнки ул саҡта эш, әлбиттә, башланасаҡ, әммә бер нисә сайт эшләнәсәк тә шуның менән барыһы ла онотоласаҡ. Башҡорт телендәге интернетты, сайттарҙы бәйләнештәре, финанс мөмкинлектәре булған һәм бер идея менән берләшкән бер төркөм кешеләр эшләргә тейеш. Минең күҙаллауым буйынса, тәьмин итеү программаларын башҡортсаға тәржемә итергә, иң популяр програмаларҙы башҡорт телендә эшләргә, башҡорт шрифтын киң ҡулланылышҡа индерергә генә түгел, айырым социаль селтәр булдырырға ла кәрәк. Айырым темаларға айырым сайттар булыуы мотлаҡ. Мәҫәлән, башҡорт телендәге китаптарҙы интернеттан табыуы әлегә ауырыраҡ. Әлбиттә, электрон китап вариантын эшләү ҡатмарлыраҡ, күп ваҡыт һәм ныҡышмалылыҡ талап итә, шулай ҙа киләсәктә башҡорт яҙыусыларының китаптарын интернеттан уҡып буласаҡ. Донъяла исеме башҡорт халҡы менән ассоциацияланған милли батырыбыҙ Салауат Юлаевҡа арналған мәғлүмәттәр ҙә айырым сайтта тупланһа, яҡшы буласаҡ. Ғөмүмән алғанда, бөтәһе лә ул тиклем насар түгел, шул уҡ "Бәйләнештә" социаль селтәрендә әүҙем башҡорт егеттәре һәм ҡыҙҙары Рәми Ғарипов, Мостай Кәримдең биттәрен булдыра, уларҙа ун мендән ашыу кеше ултыра, тимәк, ҡыҙыҡһынған кешеләр бар. Йәғни, беҙ яҙма мәғлүмәттән виртуаль донъяға күсәбеҙ икән, башҡорт халҡының әҙәбиәте, мәҙәниәте, сәнғәте, тарихы, шәхестәре тураһындағы бар мәғлүмәт унда ла сағылыш табырға тейеш.

**Илнур ЙОСОПОВ:** Шулай уҡ милләттәштәремә интернет аша аҡса эшләргә өйрәнергә лә кәрәк. Күпселек халыҡ ауылдарҙа йәшәй, килемдәре бөтөнләй юҡ тиерлек. Ә интернет уларға ҙур мөмкинлектәр бирә. Теләктәре булған кешеләргә ярҙам итеү өсөн дуҫым менән Башҡорт бизнес клубын төҙөнөк, видео-дәрестәр төшөрҙөк. Ҡыҙыҡһыныусылар бар, төпкөл ауылдарҙан да көн һайын ярҙам һорап яҙалар. Белгәнеңде кешегә өйрәтһәң, үҙең дә камиллашаһың, был эш менән шөғөлләнеүе миңә бик ҡыҙыҡ.

**Заһир ИШКИНИН:** Инфобизнестың төп мәғәнәһе лә шунда: һин үҙеңдең белемеңде үҙеңә уңайлы файлда - аудио, видео, текст форматында интернет аша һатаһың. Бөгөнгө баҙар системаһында маркетинг, пиар аша һәр нәмәне тауарға әйләндереп һатырға мөмкин. Ә интернет менән ҡулланыусы һәр рәсәйле һинең һатып алыусың була ала. Мәҫәлән, йыл ярым элек кенә башҡорт яҙыулы футболкаларҙы бер кем дә киймәй ине. Маркетинг юлы менән беҙ бындай футболка кейеү модалы икәнен күрһәтә алдыҡ.

Халыҡ, бигерәк тә оло быуын кешеләре һәр яңылыҡты һаҡлыҡ менән ҡабул итеп өйрәнгән. Хәҙер күп ойошмалар эш хаҡын банк карталарына күсергәс, күптәр уның менән ҡулланырға өйрәнде, тип уйлай инем. Минең бер танышым эш хаҡы күскән көндә ундағы бар аҡсаны тулыһынса ала һәм кеҫәһендә тере аҡса көйөнсә һаҡлай, сөнки ул электрон аҡсаға, бигерәк тә уның ярҙамында магазинда түләп булауына ышанмай. Интернет-банк һиңә өйҙә ултырып, сираттарһыҙ ғына интернетҡа, телефонға, коммуналь хеҙмәттәргә түләү мөмкинлеген бирә, былай күпкә уңайлыраҡ, ваҡытты ла алмай, тип аңлатып булмай уға. Был халыҡтың яңылыҡтарҙы ҡабул итә алмауынан түгел, ә яңылыҡтарҙы хәүеф менән ҡабул итеүенән килеп сыға. Бөтөн донъяла барған үҙгәрештәрҙән беҙ үҙебеҙҙе һаҡлай алмайбыҙ, әммә аҡыл менән дөрөҫ итеп үҙ файҙабыҙға ҡуллана алабыҙ. Ошоно төшөнһәк, интернеттың бер ҡурҡынысы ла юҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Интернеттың ҡеүәтле ҡорал икәнендә шик юҡ, уның ярҙамында аралашырға ла, бизнес менән шөғөлләнергә, тауарҙарҙы рекламаларға, төрлө хеҙмәттәр өсөн түләргә була. Был ҡорал ярҙамында бөтөн донъяны яуларға ла, милләтеңде башҡаларға танытырға ла мөмкин, шул осраҡта ғына беҙ уның менән тулыһынса файҙалана алабыҙ, тип әйтә алаҫаҡбыҙ. Интернет донъяһында башҡорт милләтенең үҙ бисмилаһы булырға тейеш. Әгәр ҙә бының киреһе булып, интернеттан үҙебеҙҙе яҡлай алмаһаҡ, беҙҙе юҡҡа сығара торған ҡоралдың кәрәге бармы һуң?**

**Әңгәмәне
Артур БАТЫРШИН
алып барҙы,
Ләйсән НАФИКОВА
яҙып алды.**

*КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ*

**...Атайым да шиғыр яҙған. Һүҙенә түгел, мәғәнәһенә күҙ текәп китәйек. Айырыуса уның шиғыр ҡалыбына һыймаған, кеше уйы тураһында әйткәндәре иҫтә ҡалған. Һөйләүенсә, бөтә көсө әҙәми заттың - уйында. Кешене һындыралар, еңәләр, ә уйын - юҡ. Уй - йәшәү ҡеүәһе...**
**...Ижадҡа ҡарашымды төҫмөрләтеп китәйем. Шиғриәтемдең башланғысы ла, төп һүҙе лә - "мин". "Мин" - аяуһыҙ хөкөмсө лә, ижадсыһын яҡлаусы ла. Ҡайһы саҡта ижад ялҡынының ҡурғыһы-уратымында "мин"легемдән тайпылам. "Мин"легемдән ҡайтҡылаһам да, үҙемдән ҡотола алмайым. Шиғыр минең булмышымды, холҡомдо, тын алышымды үҙенә һурып ала...**
**...Донъя, алдына ниндәй генә юғары маҡсат ҡуймаһын, барыбер иң беренсе нәүбәттә милләт менән кеше мәнфәғәтенән, ынтылышынан сығып эш итергә мәжбүр буласаҡ. Кеше менән милләт - кешелекте бар итеүсе лә, алға этәреүсе лә...**



# ТАШЛАМАҒЫҘ МИНЕ, ТАШЛАМАҒЫҘ,

## Һеҙ алығыҙ мине ғәскәргә!

Был юлдарҙы билдәле шағир, атаҡлы сәсән Ғәбиҙулла Зарипов ғүмеренең һуңғы йылдарында һыҙлана-һыҙлана яҙҙы. Һыҙлана-һыҙлана, әммә уларҙа зар бөтөнләй ишетелмәй. Ул, ғөмүмән, һуңғы һулышына тиклем ижад итте, милләт яҙмышы хәстәре менән йәшәне. Ҡәләмдәштәрем Рәйес Түләк, Дамир Шәрәфетдинов, Нияз Мәһәҙиев менән хәлен белергә барғанда ла, ул түҙеп торғоһоҙ ауыр сиргә дусар булыуға ҡарамаҫтан, беҙҙе аяғөҫтө баҫып, өҫтәленә табын әҙерләп ҡаршыланы һәм үҙенең ауыр хәле тураһында бер һүҙ ҙә әйтмәне, беҙҙән дә әйттермәне, һәр һүҙе әҙәбиәт, ижад, халыҡ яҙмышы хаҡында булды.

Алай ҙа беҙҙе ҡурсалаусы апайҙар бар, тием. Ҡолдәүләтте - Тамара апай Ғәниева, Рәйес Түләкте - Таңсулпан апай Ғарипова, Буранбай Исҡужинды Луиза апай Дәүләтшина ҡурсалаған кеүек, Ғәбиҙулланың ундай кешеһе Зөһрә апай Ҡотлогилдина булды. Ғәбиҙулла ауыр сиргә тарып ауылына ҡайтҡас, уға һәр төрлө ярҙам күрһәтеүҙе ойоштороусы ла, вафатынан һуң шиғырҙарын туплап, "Китап" нәшриәтендә "Шиғырҙарым - күңел шәжәрәһе" тип аталған йыйынтығын сығарыусы ла Зөһрә апай булды. Рәхмәт, тибеҙ уға.

1997 йылда беҙ бер осор ижадсылары Ҡолдәүләт, Рәйес Түләк, Ғәбиҙулла һәм мин берлектәге "Егет һүҙе" тигән китабыбыҙҙы сығарғайныҡ. Ул китап менән танышҡандан һуң Мостай Кәрим: "Һеҙ өсәүҙең ижады миңә ярайһы уҡ таныш, ә бына Ғәбиҙулланың шиғырҙарына иғтибар итмәгәнмен икән. Мин уны үҙемә астым. Үҙе иҫән саҡта хуплау һүҙҙәремде әйтеп ҡалыр инем, йәл",- тип, уның шиғырҙарына айырата баһаһын да биргәйне.

Халыҡ шағирының һүҙенә һис тә аптырарға түгелдер, тим. Шағирға ысын баһаны ваҡыт бирә бит. Бөгөн килеп Ғәбиҙулла дуҫыбыҙҙың тыуыуына 50 йыл тулған көндәрҙә "Шиғырҙарым - күңел шәжәрәһе" йыйынтығын ҡулға алып, уның нәҡ бөгөнгә төбәп яҙылған, хәҙерге хәлебеҙҙе аңлатып биргән шиғырҙарын уҡып, был хәҡиҡәткә тағы ла инанабыҙ: шағирға ысын баһаны ваҡыт бирә.

Яугир тәбиғәтле, Салауат рухлы шағир ине Ғәбиҙулла. Беҙ уны ҡәләмдәштәре, үҙебеҙсә шаяртып, "максималист" тип тә атап йөрөттөк. Шул тиклем ярҙамсыл, гәжәйеп сумарт, мул ҡуллы, кешелекле, шул уҡ ваҡытта алдына алған маҡсатына тайпылышһыҙ бара торған, кәрәк саҡта, оҙаҡ уйлап тормайынса, ҡыйыу аҙымдар, ғәмәлдәр башҡарырға әҙер зат ине ул. Уның булмышын ҡылыҡһырлаған йәш саҡтағы ҡыҙыҡлы бер ваҡиға ла иҫкә төшә.

1987 йылда әрменән ҡайтҡас, "Ағиҙел" журналында эшләп йөрөгәндә Яҙыусылар союзы идараһының яуаплы сәркәтибе, күренекле яҙыусы Булат ағай Рафиҡов ул саҡтағы "Башҡортостан пионеры" ("Йәншишмә") гәзитендә хеҙмәт итеүсе Ғәбиҙулла менән икебеҙҙе Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районында үтәсәк мөһим бер сараға ебәрҙе. Беҙҙең маҡсат: шул сарала Башҡортостан яҙыусылары исеменән сығыш яһау, үҙебеҙ эшләгән баҫмаларҙы пропагандалау, ҡыҫҡаһы, унда йәшәгән милләттәштәребеҙ менән осрашыу. Беҙҙе поездан Силәбе ҡалаһы тимер юл вокзалында урындағы Өлкә комитет вәкиле ҡаршыланы. Силәбенән Ҡоншаҡ районы үҙәгенә еңел машинала барҙыҡ.

Сәй эскәс, байрамға ярашлы саралар проекты менән таныштырҙылар. Ҡыҫҡаһы, беҙ бында өс көн буйына әллә күпме сарала ҡатнашып, урындағы партия, комсомол, профсоюз комитеттары коллективтары, хеҙмәт алдынғылары, спортсылар һәм тағы ла әллә кемдәр менән осрашып, улар менән КПСС-тың нисәнселер съезы ҡарарҙарын тормошҡа ашырыуға ярашлы әңгәмәләр алып барырға тейешбеҙ. Беҙҙән тыш был сараларға Урал, Волга төбәгенән тағы ла әллә кемдәр саҡырылған...

Ҡоншаҡ мәҙәниәт йортонда байрамды асыу тантанаһы башланыр алдынан беҙгә биш-ун минутҡа тәмәке борҡотоу форсаты тейҙе. Беҙҙең арала шундайыраҡ һөйләшеү булды:

-Был хөштөмһөҙҙәр (уның йыш ҡабатларға ятраҡан һүҙе ине) беҙҙе халыҡ менән осраштырмаҫҡа, официальшинаға тығырға итәләр, әйҙә, таяйыҡ, - тине Ғәбиҙулла икәүҙән-икәү ҡалғас.

-Беҙ бит бында Башҡортостан Яҙыусылар союзы исеменән килдек. Булат ағай ҙа ышанып ебәрҙе...

-Ул бит бында нимә буласағын белмәйенсә беҙҙе ебәргән. Беҙгә башҡорт ауылдарына барып, халыҡ менән осрашырға кәрәк. Мин бер нисә ауылды беләм, унда таныштарым да бар...

Ғәбиҙулланың ныҡышмалылығы еңде. Ҡарар ҡабул ителде. Район үҙәге мәҙәниәт йортонда сығыш яһайбыҙ ҙа, ауылдарға таябыҙ. Шулай иттек тә. Сарала һүҙҙе иң тәүҙә беҙгә бирҙеләр. Беҙ шығырым халыҡ йыйылған залды Башҡортостан исеменән сәләмләнек, шиғырҙарыбыҙҙы уҡыныҡ та, күмәк ҡул сабыу оҙатыуында мәҙәниәт йортоноң артҡы ишегенән сығып тайҙыҡ. Бик күп башҡорт ауылдарында булып, дуҫымдың таныштарын эҙләп табып, халыҡтың тын алышын тойоп йөрөнөк.

Шул сығып китеүебеҙҙең өсөнсө көнөндә генә Өфөгә ҡайтып еттек. Өфөлә Булат ағай беҙҙе яман ҡаты итеп әрләп ҡаршыланы. Баҡтиһәң, беҙҙе Силәбелә юғалтҡандар ҙа, Башҡортостан Өлкә комитетына шылтыратҡандар. Өлкә комитет Яҙыусылар союзынан беҙҙе таптырған. Булат ағайға хәлде нисек бар, шулай аңлатып бирергә тура килде. Ул беҙҙе аңланы һәм барыһын да үҙем яйлармын, тине. Шунан һуң бер йыл үткәс, 1988 йылда, Булат ағай "Ағиҙел"гә баш мөхәррир булып килгәс, беҙҙең юғалыу ваҡиғаһы нисек тамамланғанына ишара яһағайным, ағай сираттағы тәмәкеһен йомшарта-йомшарта:

-Милләттә һеҙҙең кеүек тыңлауһыҙ, дыуамал егеттәр була, уларҙың башына һуҡтырмаҫ өсөн ағайҙары ла була, - тип кенә көлөмһөрәне.

Ғәбиҙулланың тәүәккәллегенә бәйле тағы ла бик күп ваҡиғалар хәтеремә уйылып ҡалған. Улары хаҡында, Алла бойорһа, донъянан иртә киткән ҡәләмдәштәрем Ҡолдәүләт, Марсель Искәндәр, Ғәбиҙулла, Рәйес Түләк, Буранбай Исҡужин хаҡындағы китабымда бәйән итермен тигән ниәттәмен.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*ҒӘБИҘУЛЛА*

### Юғары йәндәр тураһында

Аҫҡа тарта тәнем, өҫкә - йәнем,
Елдәй үтеп тора йыл ары.
Осорғостай ғына итмә, күңел,
Иткәндә лә мине юғары.

Осорғостай ғына мине итмә,
Осорғос та күкте ярата.
Ынтыла йән, яҙмыш ҡулдарында
Аҫҡа табан баулы тән тарта.

Ҡылансыҡтай итмә. Аҫҡа-өҫкә
Сойорғотоу асыл имгәтә.
Киләсәккә, төпһөҙ бейеклеккә
Уй йөкмәгән генә йән китә.

Аҡ осорғос түгел алып осҡан,
Ҡотһоҙ уның ҡанат яҙыуы.
Елпеткәне беҙҙең күңелдәрҙе
Аҡ ҡағыҙға төшкән яҙыуы.

Яҙыу үтеп инә күңелемә,
Күңелемдә эҙләй юл ары.
Уҡығанда аҫҡа ҡарап, күрәм:
Яҙғандарҙың йәне юғары.

Йәшә минең башҡорт шиғриәтем,
Йөрәктәргә үтеп инмәле!
Йәшәмәйһең халыҡ тиңләмендә,
Йыр-бауырҙың һиндә кимәле.

Йәшәмәйһең көндөң эргәһендә,
Көнгә батып ҡатып ятырға.
Һин инәһең быуат эстәренә,
Өр-яңынан тыуып ҡайтырға.

Һин ҡалҡаһың яңы ҡояш кеүек,
Һин тыуаһың яңы ай кеүек.
Юғары йән шиғыр тыуҙырғанда,
Һелкәүестәй, донъя яй кеүек.

Юғары йән ниңә юғары ул?
Һорағандар ғына ишетә.
Ҡолойҙарҙың һүҙе баш эйҙертә,
Салауаттар рухы йәшәтә.

Салауаттың рухы - аҡ ҡауырһын,
Яралғандыр яҡты ғаләмгә.
Яҙыуҙарҙан арып туҡтамаҫҡа
Елкән итеп алам келәмгә.

Йүнәлешһеҙ йәшәү мөмкин түгел,
Белмәмешкә һалмам башымды.
Арттағыһын һыҙһам, алдағыһы
Табып бирмәҫ ҡәғбә ташымды.

Баш эйҙе лә батыр рухтарына,
Яҙыуҙарҙа китте юл ары.
Юғары ла йәндәр күтәрҙеләр
Минең уйҙарымды юғары.

### Маҡтау

Йәшә, минең Республикам,
Башҡортостан!
Күпме башҡорт һинән биҙеп,
Башҡа сыҡҡан.

Йәшә, минең Республикам,
Башҡортостан!
Һанһыҙ бурҙар һиндә йәшәп,
Тапҡан бостан.

Йәшә, минең Республикам,
Башҡортостан!
Байрамдарҙа ауыҙ итсе
Ошо тостан!

Ыңғай һине яманларға
Мин һиңмаймы?
Хәйерселәр араһында
Һин - иң байы...

### Иблестәр

Барыһын да кире эшләп була,
Эймәгәндең башын эйерҙәр.
Егәрлене аҫҡа интектереп,
Бар халыҡҡа ялҡау тиерҙәр.

Барыһын да кире эшләп була,
Ирекләне тотоп бикләрҙәр.
Ишек асып шул уҡ кешеләр бит
Һин ҡурҡаҡһың, тиеп битәрләр.

Барыһын да кире эшләп була,
Таланттарҙың ҡанын эсерҙәр.
Ҡысҡырырҙар аҙаҡ бар халыҡҡа:
"Тыумай һаман талант, сәсәндәр!"

### Моцартланыу, башҡортланыу

Һөнәр белеү өйҙән килә,
Һәләтлелек ул затта.
Быуындарҙан күсә килә
Моцартлана Моцарт та.

Йән алышы, рухты тоям
Моцарт һынлы Моцартта.
Ҡабатлайым эстән генә:
Башҡортланһын башҡорт та.

### Утрау

Һай, бер ҡатлы, ниңә ышанғанмын
Йыуашланған бынау тулҡынға?
Арбап-арбап мине йөрөттө лә,
Кире алып төштө упҡынға.

Рәсәй - диңгеҙ. Тулҡын батшаланды
Икенселәй ярҙы урауға.
Нисәнсе ҡат йөҙөп сығам бына
Башҡортостан тигән утрауға.

Йөҙгә яҡын милләт килеп тулған -
Ҡышларғамы, әллә йәйләргә?
Йолаларын миңә аңлаталар:
Ярты ауыҙ менән һөйләргә.

Ярты ауыҙ менән һөйләргә лә,
Һыңар ҡолаҡ менән тыңларға.
Бер туҡтауһыҙ мине өйрәтәләр
Ике күҙҙе йомоп данларға.

Һайтлап, тайтлап, биҙәп килтерҙеләр
Ике йөҙлөлөктән ҡатынды.
Саҡ ҡотолдом. Күнһәң, ҡоторғандар
Ҡайтарырҙар хатта кантонды.

### Ташламағыҙ мине!

Ябырыла болот, ябырыла,
Башҡаһына башты сәкәргә.
Ябырыла болот, ябырыла,
Ябырыла оҡшап ғәскәргә.

Алға ҡараш төбәп йәшәгәндәр
Төшмәҫ өсөн ерҙә ҡоллоҡҡа,
Яу артынан яуға сапҡандар ҙа
Әйләнгәндер елер болотҡа.

Ҡәлғә ҡорҙоҡ, хәйлә ҡорҙоҡ, тигәс,
Кемдәр һеҙҙең менән ярашты?
Мин теремен улар нәҫеленән,
Үҙгәртмәнем әле ҡарашты.

Тыныслыҡта кеше ҡалырмы һуң,
Үҙгәрерме донъя ағышы?
Күктә бара рухтар бәрелеше,
Күктә бара рухтар һуғышы.

Бар алыштар күскәс болоттарға,
Бар алыштар күскәс рухтарға,
Бар башҡорттар күктә йыйналғанда,
Уйламаҫ та алыш туҡтарға.

Өндәшермен бер көн рухтарыма,
Ышанысым бөтһә көс-көргә:
-Ташламағыҙ мине, ташламағыҙ,
Һеҙ алығыҙ мине ғәскәргә!

ИЖАДХАНА

**Һуңғы осорҙа башҡорт ҡала мәҙәниәтен булдырыу күп алдынғы ҡарашлы милләттәштәребеҙҙең уйланыу, борсолоу даирәһенән ниндәйҙер кимәлдә тормош маҡсатына ла әүерелә. Беҙ барыбыҙ ҙа аңлап торабыҙ: әгәр ҙә башҡорт әҙәбиәте һәм сәнғәте ауыл, һағыныу-юҡһыныу саңын ҡағып, ысынбарлыҡ тормошҡа күҙмә-күҙ ҡарай башламаһа, тиҙҙән беҙҙең уҡыусыларыбыҙ һәм тамашасыларыбыҙ үҙҙәренең башҡорт ҡала мәҙәниәтендә булған мохтажлыҡтарын түбән кимәлдәге эстрада йырҙарында, күңел-сафа ҡороуҙа ғына ҡәнәғәтләндерәсәк. Ә түбән кимәл - ул ватыҡ-емерек телебеҙ, наҙанлыҡ һәм маҡсатһыҙлыҡ. Хәҙер инде был йәштәрҙе ялмап алған сирҙе инҡар итеү - халҡыңдың киләсәгенә, үҙ балаларыңдың һәм ейәндәреңдең мөхитенә төкөрөп ҡарауға тиң. Шуға ла беҙ сәнғәттәге һәм әҙәбиәттәге һәр яңылыҡты көҙәтергә, уға дөрөҫ баһа бирергә бурыслыбыҙ. Һәр кемебеҙ. Айырыуса, милли интеллигенциялыҡҡа дәғүә итеүселәр. Шулай итеп, бөгөн мин һеҙҙең иғтибарҙы Башҡорт дәүләт академия драма театрында ҡуйылған "Артур + Нэнси" спектакле тураһында һүҙ алып бармаҡсымын.**

# АРТУР+НЭНСИ,

## йәғни Яңы спектакль, яңы ҡараш, яңы һулыш







### Режиссер

Төп геройыбыҙ - йәш режиссер Зиннур Сөләймәнов. Уның хаҡында күптән ишетелә ине: Стәрлетамаҡ театрында эшләй, спектаклдәрҙе үҙе яҙып, үҙе ҡуя, йәштәр тематикаһын айырыуса өҫтөн күрә, Мәскәүҙә уҡыуын тамамлай, һәм башҡалар, һәм башҡалар. Һәм бына Зиннур баш ҡала тамашасылары алдында ла имтихан тотто. Имтиханның да ниндәйе бит әле! Академтеатр сәхнәһендә - наркоманлыҡ һәм йәштәр темаһына спектакль. Моғайын да, был формаль заказ булғандыр, тип уйлайһым: хәҙер һәр театрға был проблеманы яҡтыртырға ҡушыла. Әммә Зиннур ошо эшендә үҙен режиссер һәм шәхес булараҡ мөмкин тиклем тулыһынса асыуға, улай ғына ла түгел, йәштәр араһында ҙур ҡыҙыҡһыныу уятып, театрға яңы тамашасыны йәлеп итеүгә өлгәште. Быныһы интернет селтәрендә барған фекерҙәрҙән дә асыҡ күренә. Спектаклде ҡарағандан һуң, уй-хистәр ҡайнай, шуға ла фекерҙәремде еткерер өсөн, иң баштан башлайым.

### Пьеса

Әлеге көндә башҡорт театр сәнғәтенең иң оло быуынына ҡараған Әнисә Дилмөхәмәтова үҙенең "Артур + Нэнси" пьесаһын бынан егерме биш йыл элек яҙған. Күрәһең, туҡһанынсы йылдарҙың дауыл-тулҡындары, көнбайыш мәҙәниәте мөхитебеҙгә бәреп инеп, төп урын яулауы драматургты гәмһеҙ ҡалдырмаған. Күҙ алдына килтерәм: ул ваҡыт өсөн урта йәштәрҙән уҙған драматург өсөн ниндәй ҡыйыу аҙым булған ул! Пьеса әле лә актуаллеген юғалтманы. Ул ғына ла түгел, алыҫ шаңдау булып яңғыраған афәт хәҙер йәмәғәт сиренә әйләнде. Хөрмәтле драматургыбыҙ Әнисә Дилмөхәмәтованың тойомлау көсөнә һоҡланырға ғына ҡала. Әммә, нимә генә тимә, пьеса беҙҙең заманға ҡулайлы булырға, хәҙерге йәштәр телендә "һөйләшергә" тейеш. Аңлашылып тора: режиссер пьесаның төп фекерен ҡалдырып, үҙенсә арыуыҡ ҡына үҙгәрткән. Һәм был спектаклдең уңышына тәүге аҙым булды.

### Хикәйәт үә хикәйәтсе

Режиссер үҙе спектакль жанрын "Мәңгелек мөхәббәт йыры" тип билдәләгән. Һәм, ысынлап та, ике сәғәтлек тамаша ниндәйҙер йыр тыңлағандай, бер тынала ҡарала. Тик йыры - заманса. Шаңҡытҡыс, мейегә һәм йөрәккә уҡ кеүек ҡаҙала торған рок көйөнә йыр, әммә ҡушымтаһында - йондоҙло, наҙлы, саф һөйөү моңо...

Гөмүмән, тамаша тормошсанлыҡҡа дәғүә итмәй. Төп геройҙарының исемдәре лә шартлы - төнгө клубтың хужаһы Тимер, уның мәкерле ярҙамсыһы - Байрам, күңел асып ҡына йәшәргә иҫәп тотҡан ҡыҙ Эльза /ошо урында Остап Бендер тураһындағы "Ун ике ултырғыс" әҫәренән Эллочканы иҫкә төшөрмәй булмай/, Артурҙың әсәһенә Доктор һәм Әсәй, тип өндәшәләр. Ә төп персонаж Нэнсиның хатта исеме лә юҡ кеүек. Нэнси - ул сәхнә исеме генә... Был образдарҙың милләте юҡ - шуға ла, ошо шартлы исемдәр уларға ныҡ килешә кеүек. Милли исемдәр булһа, геройҙарға икенсе күҙлек менән ҡарарға тура килер ине.

Эйе, был ҡатмарлы эске конфликттарҙы, характерҙарҙы асып биреүсе драма әҫәре түгел. Был - йыр, заман нәҫере, хикәйәт. Ә хикәйәт булғас, уның хикәйәтсеһе лә булырға тейеш. Һәм ошо хикәйәтсе ролендә - йәштәр араһында иң билдәле "Бүреләр" рок-төркөмө.

### "Бүреләр" рок-төркөмө

Академтеатрыбыҙҙың сәхнәһенә йәш режиссер рок-төркөмдө сығарырға, актерҙарҙы рок көйөнә тере тауышҡа йырлатырға баҙнат итә. Быны эпатаж, йәштәрҙе йәлеп итеү алымы, тип күрергә теләүселәр спектаклде ҡарағандан һуң фекерҙәрен үҙгәртһендәр. Рок көйө, тап ошо спектакль өсөн Илшат Абдуллин һәм уның егеттәре ижад иткән йырҙар - тамашаның нервыны, тамашаның ғына түгел, заман нервыны, йәштәрҙең уй-хистәр сағылышы кеүек ҡабул ителә. Төркөм өсөн дә был спектаклдә ҡатнашыу - яңы кимәлгә күтәрелеү ул. Яңы йырҙар, һис шикһеҙ, башҡорт альтернатив мәҙәниәтенең яңы гәүһәрҙәре.

Күптән инде башҡорт мюзиклы тип хыялланған ижадсыларыбыҙға шуны әйтке килә: әлеге көндә Зиннур ошо юҫыҡта иң етди аҙым яһаны. Юл ярҙы, тип әйтергә лә була.

### Ижадташтар

Күләмле ижади эш өсөн команда булыуы мотлаҡ. Һәм ошо команданың төп кешенең фекерен, идеяһын хуплауы мотлаҡ. Театр сәнғәтендә - айырыуса. Сөнки бик күп эш энтузиазмда башҡарыла. Көн-төнөнә ҡарамай. Ниндәй булһа ла килешмәүсәнлек дөйөм тамаша энергетикаһын боҙасаҡ. Был йәһәттән барыһының да - актерҙарҙың да, ҡуйыусы төркөмдөң дә берҙәм булып эшләүе һиҙелә. Ҡуйыусы рәссам Рөстәм Баймөхәмәтовтың эшенә ҡарата һоҡланыу тойғоларымды еткерергә ашығам. Бер артыҡ нәмә юҡ, барыһы ла тамашаның төп фекеренә буйһона. Хореограф Рәмизә Мөхәмәтшинаның эше лә матур баһаға лайыҡ. Әммә актерҙар хореограф тәҡдим иткән пластик образдарҙы еренә еткермәй кеүек әле. Рок көйөнән ағылған тулҡындарҙа һулпәнерәк йөҙәләр әлегә. Һуғыш сәхнәләрен ҡуйыусы Зөлфәр Әхмәтов үҙенең башҡорт театр сәнғәте өсөн хазина икәнен тағы бер иҫбатланы.

Актерҙарға килгәндә инде һәр кем үҙенең образын эҙләгәне, ролдәренә мөкиббән киткәндәре һиҙелә. Ике составты ла ҡарағас, ҡайҙа - режиссер, ә ҡайҙа актер үҙе икәнен күреп була. Сәғиҙулла Байһегеттең Тимер Рәмилевиче - яуызлыҡҡа башкөлләй сумып, шунан ләззәт тапҡан ҡурҡыныс кеше. Уның Нэнсиға һөйөүе - хакимлығы булған әҙәмдәрҙең кеше яҙмышы менән уйнауы ғына... Ирек Булатовтың роле - үҙе ҡорған тормоштан арыған, кешелек сифаттарын юғалтмаған, әммә сигенергә урын юҡлығын аңлаған әҙәм. Көслө булырға тырышҡан көсһөҙ кеше. Рәзифә Динмөхәмәтова уйнаған Эльза - төптән уйлап эшләнгән сағыу образ. Нэнсиның әхирәте тип һаналған ҡыҙ көнсөллөктә тонсоҡҡан. Рәзифә роле ым-ишара менән оҫта эшләй, көлкө һәм ытырғыныс кеүек ике тойғо араһында тамашасыны ныҡ тотоп килә. Шуға ла уның һәр сығышы, һәр репликаһы көтөп алынды. Яңы уңышың менән, Рәзифә! Ә бына Фирүзә Аллаярова уйнаған Эльза кешелек сифаттарын юғалтмаған, үҙенә лә, Нэнсиға ла йәлләү тойғолары кисерә. Әммә Фирүзә әлегә ролде кейгән күлмәгендәй үҙенә "һылаштыра" алмаған. Киләһе спектелдәрҙә тулыраҡ, йәнлерәк күрергә ине талантлы артист, тормошта сағыу һәм ҡыйыу Фирүзә Аллаярованың Эльзаһын да. Әшәке әҙәм Байрам ролен башҡарған Артур Ҡунаҡбаев иһә йәнде өшөтә, донъяла яуызлыҡтан ләззәт табып йәшәүселәр ҙә барлығын иҫкә төшөрә... Артур үҙенең төрлө планлы актер икәнен иҫбатланы.

Әсә роленә килгәндә, Светлана Хәкимова уйнаған Әсә - хистәрен үҙендә баҫырға тырышҡан ҡатын булһа, Гүзәл Маликова үтә хисле. Һәм был тәбиғи. Фирғәт Ғарипов уйнаған ярһыу Артурҙың Әсәһе тап Светлана Хәкимова кеүек булғанына, ә баҫалҡыраҡ, ҡыйыуһыҙыраҡ Артур Кәбиров уйнаған Артурҙың Әсәһе тап Гүзәл Маликова кеүек булғанына ышандыра. Нэнсиларға килгәндә инде, Гөлнара Ҡаҙаҡбаева өсөн был роль, һис шикһеҙ, яңы кимәлгә күтәрелеү билдәһе. Яңы амплуала үҙен саҡ ҡына ҡыйыуһыҙыраҡ тотһа ла, тулыһынса ышандырҙы. Үҙе лә йырлаған, сәхнәлә лә төрлөрәк образдар сығарған Ирада Фазлаева өсөн Нэнси роле еңелерәк бирелгәндер. Ике йәш артистың да Нэнсилары сағыу һәм үҙенсәлекле.

### Мәңгелек ижад йыры

Ә инде атап үткән барыһының да уңышы ла, уңышһыҙлығы ла бер кешегә - режиссерға бәйле. Етешһеҙлектәр ҙә барҙыр, уны башҡалар яҙһын, тик мин ошо спектаклдең иң отошло урындарын ғына күрҙем. Сөнки минең өсөн "Артур + Нэнси" театр тамашаһы ғына түгел, ә тәү сиратта башҡорт ҡала мәҙәниәтен, ниһайәт, икенсе кимәлгә күтәреүҙең, йәштәрҙең зал тултырып эркелеүенең билдәһе. Ошоноң өсөн айырым рәхмәт әйтке килә Зиннур Сөләймәновҡа. Һәм уға ярҙам иткән театр етәкселегенә һәм хеҙмәткәрҙәренә.

Зәһрә БУРАҠАЕВА.

✔ *Иң мөһиме, беҙгә үҙенең ҡотолғоһоҙлоҡ алдында тороуын аңлаған кешеләрҙең үҙ теләктәре менән килеүе шарт, сирленең дауаланыуға үҙ ынтылышы булмайынса тороп, ыңғай һөҙөмтәгә өмөт итергә тура килмәй.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# СӘЙ ЭСҺӘҢ... стресҡа бирешмәҫһең

■ Гавайа университеты ғалимдары асыҡлауынса, стресты тирә-яҡтағы, мәҫәлән, бер өйҙә йәшәгән, бергә эшләгән кешеләрҙән йоҡторорға ла мөмкин. Бында һүҙ "пассив стресс" тураһында бара, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙар быҙдай "инфекцияға" бирешеп бара, сөнки улар күпкә тәьҫирләрәк. Табиптар фекеренсә, иң төп хәүефте ярһыған етәксе һәм ҡыҙып барған ир тыуҙыра. Уларҙың асыуланғанын күргән ҡатын-ҡыҙҙа шунда уҡ хәүеф һәм ҡурҡыу тойғоһо барлыҡҡа килә. Ошоно пассив стресс тип йөрөтәләр ҙә инде. Стресс булмаһын өсөн ваҡытында саралар күрергә тәҡдим итә белгестәр. Мәҫәлән, был осраҡта йога ныҡ ярҙам итә. Шулай уҡ Ҡытай халҡынан бер кәңәш: әгәр ҙә нервыларығыҙҙы тынысландырам, тиһегеҙ, сәй ҡайнатығыҙ, сөнки бер үк ваҡытта сәй эсергә һәм борсолорға мөмкин түгел.

■ Изге Лаврентий университеты ғалимдары тикшеренеүҙәренә ярашлы, биш минут дауамында һағыҙ сәйнәү иғтибарҙы туплаға ярҙам итә. Тик һағыҙҙы ваҡытында сүп һауытына ташларға ла өйрәнергә кәрәклеген белдерә табиптар. Тәжрибәләр күрһәтеүенсә, мәҫәлән, имтихан мәлендә һағыҙ сәйнәү, киреһенсә, һөҙөмтәле эшләргә ҡамасаулай.

■ Көньяҡ Кореяның Ауыл хужалығы милли академияһы докторы Сан Ми Хан иҫәпләүенсә, бал ҡорто ағыуы тиренең һығылмалылығы өсөн кәрәкле коллаген бүленеп сығыуына булышлыҡ итә. Тиҙҙән был ысул баҙарҙан ботоксты сығарып ташлаясаҡ, тип иҫәпләй белгестәр. Тирегә бал ағыуы нигеҙендә яһалған крем һөрткәндә, кеше сәнсеү тоясаҡ. Был ваҡытта организм бал ҡорто сағыу тәьҫиренә дусар итеlә, һөҙөмтәлә, был урынға ҡан йүгерә, коллаген һәм эластин бүленеп сыға. Әйткәндәй, бал ҡортоноң ағыуын йыйыу өсөн ҡорттарҙы үлтерергә кәрәкмәй, бары тик уларҙан быяла-коллекторҙы сақтырыу ҙа етә.

■ Бөгөн күптәр дарыуҙар урынына халыҡ дауаһы ҡулланырға тырыша. Вирусты миҙгел ауырыуҙары әүҙемләшкән мәлдә миндаль сәтләүеге ҡулланыу яҡшы һөҙөмтә бирә. Быға тиклем миндаль йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен профилактикалау, холестерин кәмелен түбәнәйтеү өсөн ҡулланыла ине. Бының өсөн кардиологтар көнөнә яҡынса 90 грамм миндаль ашарға кәңәш итә. Күптән түгел Норича (Великобритания) һәм Мессин ҡалаһы университеты (Италия) ғалимдары был сәтләүектең иммун реакцияларын көсәйтеү һәм вирустарҙың әүҙемлеген кәметеү һәләтен билдәләгән. Сәтләүектең тиресәһендә булған матдәләр лейкоциттарҙың әүҙемлеген арттырып, вирустарҙың күҙәнәк эсенә үтеп инеүен тотҡарлай. Миндалдең организмға ыңғай тәьҫире ул тулыһынса эшкәртелеп бөткәс тә һаҡлана әле.

■ Һеҙ дөрөҫ туҡланһығыҙ һәм даими рәүештә спорт менән шөғөлләнһәгеҙ ҙә ултыраҡ тормош организмға кире тәьҫир итә, тип иҫәпләй Тель-Авив университеты ғалимдары. Бер үк позала ултырыу организмға май йыйылыуға килтерә. Әгәр ҙә кеше оҙаҡ хәрәкәтләнмәйенсә ултырһа, бер ниндәй диеталар ҙа ярҙам итмәйәсәк.

*АЙЫҒАЙЫҠ, ЙӘМӘҒӘТ!*

**Эскелек афәтенең бөгөнгө тормошобоҙҙа киң ҡолас йәйеүе ирекһеҙҙән һуғыш йылдары ҡырғынын хәтерләтә. Эсеп ҡырылғандары ла күп, әлегә үлмәгәндәренең иһә сыҡмаған йәне генә тороп ҡалған: улар тамам кешелек сифатын юғалтып, зәғиф аҡылға, зомбиға әүерелеп бөткән. Халыҡтарҙың айыҡ өлөшө, йәмәғәтселек һәм ана шул алкоголиктарҙан яфа сигеүсе уларҙың яҡындары был афәткә ҡаршы нисек көрәшергә лә, эште нимәнән башларға, кемгә мөрәжәғәт итергә лә белмәй. Дөрөҫөрәге, был мәсьәлә менән күҙ терәп кенә барып мөрәжәғәт итерҙәй бер инстанция ла юҡ беҙҙә. Ил етәкселеге һәм уның күрһәтмәләрен бойомға ашырырға тейешле Хөкүмәтебеҙҙең эскелеккә ҡаршы көрәш концепцияһы, эш программаһы бөтөнләй юҡ. Әлбиттә, республикабыҙ ҡала һәм районларында наркология кабинеттары бар. Эшләй, тип әйтергә нисектер тел әйләнмәй, сөнки уларҙың эшен күргән юҡ әлегә. БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының 1-се Республика наркология диспансеры тураһында ла ишетелеп ҡалғылай. Күп тапҡыр ишеткәнсе, бер тапҡыр күр, тигәндәй, беҙ ошо учреждениеға барып, уның баш табип урынбаҫары, юғары категориялы нарколог, врач-психиатр Илдар ГӘРӘЕВҡа диспансер эшмәкәрлеге хаҡында һөйләүен һорап мөрәжәғәт иттек.**

# "ҠАЙҺЫҒЫҘҘЫҢ ҠУЛЫ ЙЫЛЫ - Бәйләйһе бар йөрәкте..."



**➔ Илдар Фәнил улы, алкоголизм менән яфаланыусылар нисек итеп һеҙҙең диспансерға әлегә һәм дауалана ала? Һорауҙың былай ҡуйылышы өсөн ғәжәпләнмәгеҙ: белеүемсә, диспансерға килеп әләгеү ярайһы ауыр мәсьәлә, сөнки бының өсөн әллә күпме формаль-бюрократик кәртәләр аша үтергә кәрәк, ә эскесе ул юлдарҙан йөрөмәйәсәк, әлбиттә.**

- Кемгә кәрәк, кем үҙенең кешелектән сыға барыуын аңлар хәлдә - улар килеп таба беҙҙе. Иң мөһиме, беҙгә үҙенең ҡотолғоһоҙлоҡ алдында тороуын аңлаған кешеләрҙең үҙ теләктәре менән килеүе шарт, сирленең дауаланыуға үҙ ынтылышы булмайынса тороп, ыңғай һөҙөмтәгә өмөт итергә тура килмәй. Диспансерҙа дауаланыу мәсьәләһенә килгәндә, бында ниндәйҙер ҡаршылыҡтар һәм ҡыйынлыҡтар бар тип әйтмәҫ инем. Бары тик сирленең йәшәгән урыны буйынса наркология кабинетына барыуы талап ителә. Унда пациентҡа тест рәүешендә анкета һорауҙар бирелә һәм яуаптарҙан шул асыҡлана: алкоголизм менән етди сирләме кеше, әллә көнкүрешендә эскелек менән мауығамы. Участка наркологы кәрәк тип тапһа, Республика наркология диспансерына йүнәлтмә бирә. Ә ҡайһы берәүҙәргә амбулатория шарттарында дауаланыу ҙа етә.

**➔ Ғәфү итегеҙ, һүҙегеҙҙе бүлдерәм: ә был ике категория араһында берәй айырма бармы?**

- Алкоголизмдың билдәле бер үҙенсәлектәре була, уға ҡарап, әйе, был кеше сирле, ул дауаланыуға мохтаж, башҡаса уға эсергә ярамай, тип айырым-асыҡ әйтеп була. Был уның эсеү самаһын юғалтыуынан, әҙләкһеҙ эсеүҙән, ҡоҫоу рефлексы булмауынан, яңғыҙ ултырып эсеүҙән, алдан араҡы алып ултыртып ҡуйыуҙан һәм башҡа шундай күренештәрҙән ғибәрәт. Бер аҙ ваҡыттан эскесе сама тойғоһон тамам юғалта, унан инде психологик өйрәнеүгә физик ылығыу ҙа өҫтәлә. Шулай итеп, бахмур синдромы барлыҡҡа килә. "Баш төҙәтеү" ихтыяжы врачтар телендә алкоголизмдың 2-се стадияһы билдәһе булып тора. Айыҡҡас, иҫерек сағында сирленең үҙе менән нимә булғанын да хәтерләмәүе алкоголизм менән яфаланыуҙың тағы бер төп үҙенсәлеге.

Беҙҙең дауалау учреждениеһы хаҡында башлаған һүҙемде дауам итеп, тағы шуны әйтер инем: әлеге ваҡытта Республика наркология диспансеры ҡарамағында Өфө ҡалаһы буйынса 10 стационар бүлексә, амбулатор-поликлиника подразделениеһы янында 25 урынлыҡ көндөҙгө стационар һәм Сибай ҡалаһында 45 урынлыҡ диспансер бүлексә бар, йәғни беҙҙең диспансер ҡарамағында, йыйып ҡына әйткәндә, 495 урынлыҡ стационар эшләй. Бынан тыш, химик-токсикологик лаборатория, иҫереклек хәлендәгеләрҙе тикшереүсе тәүлек әйләнәһенә эшләүсе 3 кабинет, тәмәке тартыуға бәйлелекте дауалау кабинеты, баш ҡала яны зонаһында 70 кешегә иҫәпләнгән социаль-медицина реабилитацияһы бүлексәһе һәм башҡа хеҙмәттәр бар.

**➔ Редакцияға килгән хаттарҙың береһендә уның авторы Н. шундай һорау бирә: "Ирем пенсияға сыҡты ла башҡоллай эскегә һабышты. Ниҙәр генә эшләп ҡараманым - файҙаһыҙ. Инде айырылышырға ғариза яҙырға йыйынғайным, шунда ғына дауаланырға ризалашты, тик код ҡуйҙырырға ҡырҡа ҡаршы төшә, ул психиканы боҙа", ти. Был дөрөҫмө? Башҡа төрлө зыянһыҙыраҡ ниндәй дауалау ысулдары бар икән?**

- Мин хат авторын ғәйепләй алмайым, сөнки ул наркология өлкәһендә белгес түгел. Ә бына нарколог-белгескә ҡарата ошондай (әйткәндәй, ундай һорауҙарҙы йыш ишетергә тура килә) һорауҙың ҡуйылышын мин, йомшаҡ ҡына итеп әйткәндә, төптө дөрөҫ түгел, тип иҫәпләйем. Бөгөн наркология өлкәһендә бик күп төрлө дауалау ысулдары бар, ләкин диспансер шарттарында уның теге йәки был төрөнә өҫтөнлөк бирелмәй, ә комплексы дауалау сараһы күрелә. Был иһә стационар һәм амбулатор ярҙамды, шул иҫәптән рәсми медицинала рөхсәт ителгән дауалау саралары: традицион булмаған ысулдар, психотерапия, гипноз элементтары, медикаментоз дауалау ысулдарын үҙ эсенә ала. Бында шуныһы ла бик мөһим: пациент фәҡәт алкоголизмдан ғына түгел, ә дөйөм дауаланыу этабын үтә. Йәғни уның алкоголизмдан зыян күргән эске ағзалары: бауыр, ашҡаҙан асты биҙҙәре, бөйөр, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы - ентекле тикшерелеп, организм алкоголь ағыуынан таҙартыла һәм дөйөм һауыҡтырыу саралары күрелә.

**➔ Эскелек ҡатын-ҡыҙ араһында ла киң таралды. Был айырыуса ауылдарҙа күҙәтелә. Эскесе ҡатын-ҡыҙҙы дауалау ирҙәрҙе дауалауға ҡарағанда ауырыраҡ бирелә, тигән ҡараш йәшәй. Был ысынлап та шулаймы?**

- Ҡатын-ҡыҙ алкоголизмы айырым һөйләшеүҙе талап итеүсе етди мәсьәлә бөгөн. Нескә заттарҙың организм төҙөлөшө шундай: улар быңдай яман сир алдында ирҙәргә ҡарағанда яҡлауһыҙыраҡ. Өҫтәүенә, ҡатын-ҡыҙ алкоголизмы башланғыс этаптарында йәшертен рәүештә формалаша. Уларҙың эскелек менән мауыға башлауы йыш ҡына психоген факторҙарға, йәғни ғаилә мөнәсәбәттәрендә, эш урынындағы конфликтлы хәл-торошторға бәйле була, шуға күрә лә уларға наркологик йәһәттән генә түгел, психологик ярҙам да күрһәтелә.

**➔ Дауаланып, эсеүҙе ташлау - ул әле тулыһынса һауығыу тигәнде аңлат-**

**май, тип тә әйтәләр. Тимәк, хроник сирлене теләһә ҡайһы мәлдә яңынан эскегә бирелеү хәүефе һағалаймы?**

- Эйе, алкоголизм хроник сиргә әйләнә. Дауаланғандан һуң пациенттың артабанғы яҙмышы уның үҙ сиренә ҡарата булған мөнәсәбәтенә бәйле. Һәм ул айыҡ тормош осоронда килеп тыуыуы ихтимал депрессия, кәйеф тотороҡһыҙлоғонан арынырға үҙендә көс таба һәм ныҡлыҡ, аңлылыҡ күрһәтә ала икән, тимәк, айыҡ йәшәү рәүеше ғүмеренең ахырынаса дауам итәсәк.

Тотороҡһоҙлоҡ мәлдәрендә пациент белгес ярҙамына, реабилитацияға мохтаж. Шуның өсөн дә дауаланыу һөҙөмтәләрен нығытып ҡуйыу өсөн уның өҙлөмә рәүештә реабилитация курсы ла үтеүе фәҡәт файҙаға ғына буласаҡ. Әйткәндәй, наркология өлкәһендә сағыштырмаса яңы йүнәлеш - ауырыуҙарға социаль-медицина реабилитацияһы ярҙамы күрһәтеү. Әйтеп китеүемсә, 2000 йылда беҙҙең диспансер нигеҙендә Йоматау ҡасабаһындағы шифахана зонаһында 70 урынлыҡ ҡала яңы реабилитация үҙәге эшләй башланы. Экологик таҙа тәбиғи шарттар, хеҙмәт терапияһы, спорт майҙансығы, Дим йылғаһы буйындағы пляж, йәйәү йөрөү өсөн махсус һуҡмаҡтар һәм һәр саҡ ярҙамға килергә әҙер булған медицина хеҙмәткәрҙәре - былар барыһы ла дауаланыу сифатын күтәреүгә булышлыҡ итә. Бер үк ваҡытта Үҙәктә пациенттарҙың яҡындары йәлеп ителеп, ғаилә программаһы буйынса саралар үткәрелә. Был айыҡ тормошҡа ҡайтҡан кешеләрҙең ғаиләләренә психологик ярҙам күрһәтеү йәһәтенән дә бик отошло эш алымы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмәнән аңлашылыуынса, алкоголиктарҙы дауалау эше ал да гөл тип әйтерлек икән дә! Бынан ун йыллап элек "Башҡортостан" гәзитендә эшләгәндә минә ниндәй мәғлүмәт бирелгән булһа, әле лә шул уҡ ҡоро отчет бәйән ителде. Күңел йыуатырҙай бер ниндәй өмөтлө новация, яңылыҡ ишетмәнем. Үкенескә күрә, минең, бынан 10, 5 йә булмаһа һуңғы 1-2 йылда нисә кеше дауаланып, айыҡ тормошҡа ҡайтарылды икән, тигән һорауым ғына иғтибарға алынмай, һауала аҫылынып торған килеш ҡалды. Эйе, беҙ белгестәр түгел, бәлки,был хаҡта әйтергә ярамаған үҙенә күрә нескәлектәре, серҙәре барҙыр. Улай тиһәң, Республика диспансеры ябыҡ учреждение түгел дә бит... Унан һуң, күпме кеше эскелек афәтенең үлемесле тырнағынан йолоп алып ҡалынғанлығын ыңғай миҫал рәүешендә һәм дауалау учреждениеһының яҡшы исемен таратыу өсөн генә булһа ла беҙҙең белергә хоҡуғыбыҙ барҙыр бит... Дауаланып, айыҡ юлға баҫҡан кешеләрҙең исем-шәрифен түгел, ә һанын ғына белеү ҙә бында эштең нисек ҡуйылыуы хаҡында өҙтәмә мәғлүмәт бирер ине, тигәндән сығып ҡына әйтелгән һүҙ булды был. Бигәйбә!**

**Ҡыҫҡаһы, үҙ теләге менән дауаланырға килеүселәргә - афарин, сәләмәт булһындар. Ә бына әлегә ундай теләк менән янмағандарҙы ни эшләтергә? Күрәләтә битарафлыҡ һаҙлығына батырырғамы? Дауаланырға теләмәүҙәрен кирегә бөткәнлек тип ҡарарға ярамайҙыр, бәлки? Шул уҡ сирҙең бер күренеше, әҙемтәһе түгелме ни был? Кем ярҙам ҡулы һуҙыр, кем бәйләр уларҙың күңел яраһын?**

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

### _ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП..._

**Клара Рәхмәтуллина, медицина хеҙмәткәре:** Бөгөн Рәсәй буйынса 1,7 миллион алкоголик, 550 мең наркоман рәсми теркәлгән. Ә теркәлмәгәндәре күпме! Алкоголизм да, наркомания ла хроник ауырыуҙар иҫәпләнә. Был категория сирлеләр стресс, депрессия хәлдәрен бик ауыр кисерә, тиҙ бирешеүсән булалар. Белеүемсә, республикала бындай сирлеләргә наркология ярҙамы күрһәтеүсе хеҙмәттәр эшләй. Өфөнөң һәр районында наркология кабинеттары, уларҙың стационарҙары бар. Уларҙың эшенә баһа бирә алмайым, сөнки нисек эшләйҙәр - белмәйем, ләкин унда эскеселәрҙе шешәгә алдаштырып та алып барып булмай бит! Үҙ хәленең фажиғәһен аңлаған бик һирәктәр генә үҙ теләге менән барып дауалана.

**Тәнзилә Ишкилдина, пенсионер, хеҙмәт ветераны:** Эскән кешене дауалау мәсьәләһенә килгәндә, шуны әйтер инем: ниңәлер берәүҙән дә, наркология диспансерында дауаланып, эсеүҙе ташлаған икән, тигәндәрен ишеткәнем юҡ, ул кабинеттар һәм стационарҙарҙың ҡайҙа икәнлеген дә белмәйбеҙ хатта. Килен ҡустымды коммерция нигеҙендә эшләүсе бер наркологҡа алып барғайны, уның "шифаһы" оҙаҡҡа етмәне. Ә 5 меңгә яҡын аҡса түләнеләр. Аҙаҡ ниндәйҙер муллағамы, халыҡ табибынамы алып барып, шунан һуң ғына ярты йылға яҡын инде бына айыҡ йөрөй әлегә. Киләсәк ни күрһәтер...

**Зөлфирә Уразмәтова, 15 йыл "стажлы" алкоголик ҡатыны:** Ошо эскесе ир арҡаһында үҙемдең генә түгел, балаларымдың да ни тиклем яфа сигеүен һөйләп тә тормайым. Ундайҙы башынан кисергәндәр генә аңлар, аңлаһа. Һөйләй башлаһаң, барыбер эскесе ир түгел, ә ҡатын гәйепле булып килеп сыға. "Йүнле ҡатындың ире эсмәй", тип кенә ебәрәләр. Мин барыбер ирҙең "койроғон" бороп тоторҙай бисә була алманым шул. Әле пенсияға сыҡҡайны, уғата ҡотороп эсә башланы, ҡыумаһа ла, өйҙә лә түҙеп торорлоҡ түгел уның менән. Дауаланыуға риза түгел. Исмаһам, эскелектән мәжбүри дауаланыуҙы тергеҙһендәр ине. Кеше күҙ алдында юҡҡа сыға бит! Мәжбүр итеп, ирекһеҙләргә закон ҡушмай, тиҙәр, тимәк, ундай закон эскесегә ятып үлергә ҡушамы?..

### _УҢЫШ ҠАҘАН_



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Менталь кимәлдәге эш ҡағиҙәләре

**3. Уйлап эш итеү.** Уйлау - ике яҡ хәрәкәтле урам. Тәү сиратта, әңгәмәсегеҙҙең ҡарашында нигеҙ эҙләгеҙ. Был - уның ҡарашы, һеҙҙеке түгел. Һуңынан уйыгыҙҙа ғына үҙегеҙҙең ҡарашығыҙҙы баһалағыҙ. Һәр позицияла үҙенең "эйе" һәм "юҡ"тары йәки ыңғай һәм кире яҡтары булыуын табырһығыҙ. Уларҙы сағыштырығыҙ, үҙегеҙҙең һәм әңгәмәсегеҙҙең дәлилдәренең ыңғай һәм кире яҡтарын үлсәгеҙ. Фекер алышҡан темаға айыҡ аҡыл менән ҡарағыҙ.

**4. Ихтыяж.** Үҙегеҙҙең ихтыяжығыҙҙы баһалағанда шундай күҙлектән ҡарағыҙ: әгәр уны ҡәнәғәтләндерһәм, күпме проблема хәл ителәсәк? Башҡа ауырлыҡтар менән нимә буласаҡ? Бер проблема хәл ителһә, ҡайһы берҙә уның артынса уҡ башҡалары ла юҡҡа сыға. Үҙегеҙҙең ихтыяжығыҙҙы ҡәнәғәтләндергәс, тояҫаҡ "бәхет сылбырын" оҙонораҡ итеп тоҙәргә тырышығыҙ, уға мөмкин булған тиклем күберәк кешене йәлеп итегеҙ.

**5. Килешеү.** Үҙегеҙҙә әңгәмәсегеҙгә ҡарата ыңғай фекер тыуҙырығыҙ. Әйҙә, ул да ҡаршы тороу һәм дошманлыҡ тойғоларын ҡыуып сығарһын, һеҙ икегеҙ ҙә проблеманы хәл итеү юлын эҙләйһегеҙ.

Хәҙер һеҙ уйығыҙҙа ғына икенсе кешенең "эсенә инеп", уның кәйефен, тойғоларын үҙегеҙ теләгән яҡҡа борорға һәләтле. Был күнекмәне эшләр алдынан инструкцияны яҡшылап иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

### Нисек итеп икенсе кешенең тойғоларын үҙгәртергә?

- Ҡулығыҙға был кешенең фотоһүрәтен алып, тәнегеҙҙе көсөргәнештән арындырығыҙ. Анығ һүрәт булмағанда, уйҙағы образды файҙаланығыҙ. Күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ.

- Биш ҡағиҙәне теүәл үтәгеҙ: был кешене яратығыҙ, уны аңлағыҙ, уның аңлатмаларына үтеп инегеҙ, уртаҡ ихтыяждарығыҙҙы баһалағыҙ, уның менән бәйләнеш тойоғоҙ.

- Уйығыҙҙа ғына был кешенең менталь кимәлдә үҙегеҙ менән килешеүен үтенегеҙ. Уға мөрәжәғәт иткәндә яғымлы булығыҙ, бойороҡтар бирмәгеҙ.

- Көсөргәнештән арынған халәттән сыҡмайынса, күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ, фотоһүрәткә ҡарағыҙ. Был кеше һеҙҙең менән ризалаша тип күҙ алдына килтерегеҙ. Күҙҙәрегеҙҙе ҡабат йомоғоҙ.

- Биш ҡағиҙәгә: һөйөү, аңлау, уйлап эш итеү, ихтыяж һәм раппортты теүәл үтәгәнегеҙгә инаныгыҙ.

- Көсөргәнештән арыныуҙы туҡтатып, күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм аңлашмаусанлыҡтар юҡҡа сыҡҡанына ныҡлы ышаныгыҙ, күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм ысынбарлыҡҡа ҡайтығыҙ.

Башҡаларҙың тормошон яҡшыртырға ярҙам иткән һайын үҙ тормошоғоҙ яҡшыра бара. Бындай халәт һеҙгә автоматик рәүештә күҙгә күренмәҫ терәк килтерә.

**Роберт СТОУН.**

### _МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ_



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



## Туҡланыу тураһында

Дисбактериоздан ҡотолоу өсөн рациондан сүпрә ҡулланып бешерелгән икмәк-калас ризыҡтарын алып ташларға, аҙна дауамында бейә ҡымыҙы эсергә кәрәк. Ҡымыҙҙа көслө һәм файҙалы бактериялар бар, улар сүпрә, хатта туберкулез таяҡсаларынан да көслөрәк.

Аш һеркәһе лә бик насар - ул ҡыҙыл ҡан тәнсәләрен - эритроциттарҙы емерә. Консервалағанда аш һеркәһен лимон кислотаһы менән алыштырығыҙ.

Колбаса яратаһығыҙмы? Тәжрибә өсөн ҡомаҡтарға колбасаға ҡушыла торған соя ашатҡандар. Беренсе быуында уҡ ҡомаҡтар ғәрип булып тыуған, артабан инде бөтөнләй нәҫелен дауам итмәгән. Колбасаға ҡушылған соя генетик модификацияланған.

Шәкәр - ағыу! Юҡҡа ғына шәрбәтле ризыҡ ашағандан һуң балалар тәненә сабыртма сыҡмайҙыр.

Һөт менән дә артыҡ мауыҡмағыҙ, унда хайуандарҙың мөгөҙө һәм тояғы үҫһен өсөн кәрәкле козеин (клейстер) күп. Һеҙгә мөгөҙ кәрәкме? Иң яҡшыһы - әсегән һөт продукттары ҡулланыу.

Сит илдән индерелгән эсемлектәрҙе лә эсмәгеҙ - уларҙа бер яҡшы нәмә лә юҡ. Әгәр кока-колаға, пепси-колаға ит киҫәген һалһағыҙ, бер нисә сәғәттән улар юҡҡа сығасаҡ. Был эсемлектәр бер нисә көн эсендә тештәрҙе бөтәрә, ни тиклем күберәк эсһәгеҙ, шул тиклем нығыраҡ һыуһарһығыҙ, сөнки уларға сарсатыусы матдәләр ҡушалар. Улар, үҙ сиратында, күҙәнәк араһындағы шыйыҡлыҡты һурып алып, организмдың ваҡытынан иртә ҡартайыуына килтерә.

Ни өсөн супермаркеттарҙа азыҡ-түлек һәр саҡ "яңы"? Сөнки уларға көслө консервант ҡушылған. Хатта киҫелгән картуф та дүрт ай буйы ҡараймай. Консервантҡа ҡушылған һөт асыҡ ултырһа ла бер нисә аҙна әсемәй.

Галина Бланка кубиктары - натрий глутаматы ("тәм"-де яҡшыртыусы) - организмды ағыулаусы. Уны башҡа бик күп аш тәмләткестәргә лә ҡушалар.

Әгәр емеш-еләк, йәшелсә серей башлаған икән - улар ҙа кире энергетикаға эйә. Микротулҡынлы мейестә әҙерләнгән азыҡ та зарарлы.

Ә нимә ашарға һуң?

Һәр төрлө шыттырылған иген файҙалы. Уларҙа энергетика миллион тапҡырға күбәйә (тере энергетика)! Тап шундай энергетика иҫәбенә үлән бетонды тишеп сыға! Киптереп шыттырылған бер-нисә орлоҡ йәки борсаҡ булһа ла ашағыҙ! Төрлө орлоҡтар ҙа файҙалы. Уларҙа яңы тормош башланһын өсөн барлыҡ кәрәкле һәм ҡиммәтле нәмәләр бар.

Шулай уҡ бал һәм умартасылыҡтың теләһә ниндәй продукцияһы ла, финик, сәтләүектәр, йәшел тәмләткестәр (хлорофилл сығанағы), һарымһаҡ, һуған, дингеҙ һәм сей кәбеҫтә, лимон, курага, йөҙөм, ҡара емеш, ҡымыҙ, сей йәшелсә-емеш бик файҙалы!

**Рауфан МОРТАЗИН.**
**(Дауамы бар).**



## 19 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Агент национальной безопасности"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым"
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Жизнь и приключения Мишки Япончика". Сериал
22.30 "Судьба на выбор", 8-я серия
23.30 "Познер"
00.30 Ночные новости
00.45 "Майкл Джексон и его доктор"
01.40, 03.05 "Детройт 1-8-7"
03.00 Новости"
04.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Все к лучшему", 235-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья", 205-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 51-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Сваты-5", 1-я серия
23.05 "Городок"
00.05 "Исаев". "Пароль не нужен", 1-я серия
01.00 "Вести+"
01.20 "Профилактика"
02.25 "Пристрели Луну". Драма
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Шаман". "Кровавый маршрут". Сериал
21.25 "Дикий-2". Криминальный сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Главная дорога"
01.45 "В зоне особого риска"
02.20 "Один день. Новая версия"
02.55 "Ставка на жизнь". Остросюжетный сериал
04.55 "Сыщики". Детективный сериал

### БСТ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**
**14.00 "Новости недели"**
**14.30, 16.30, 17.30, 18.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.15 "Учим башкирский язык"**
**15.30 "Гора новостей"**
**15.45 "Царь горы"**
**16.00 "Бауырхак"**
**16.15 "Шатлык йыры"**
**16.45 "Хазина". Конкурс им. Ю. Исянбаева. IV часть**
**17.15 "Надо знать!"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 "Еду я в деревню"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45 Чемпионат России по борьбе куреш**
**20.40 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Следопыт"**
**21.15 "Деловой Башкортостан"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**23.00 Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**23.15 "Пора разобраться"**
**00.00 "Замандаштар"**
**00.15 "В зимний вечер". Концерт**

## 20 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Агент национальной безопасности"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым"
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Жизнь и приключения Мишки Япончика". Сериал
22.30 "Маленькие гиганты большого кино". Док. фильм
23.30 Ночные новости
23.55 "На ночь глядя"
00.50 "Terra nova". Сериал
02.30, 03.05 "Рождество". Мелодрама
03.00 Новости

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
